✓ Ҡайһы саҡта Хоҙай килеп, һинең ишегеңде шаҡый икәнен беләһеңме? Ишегеңде шаҡыусы Хоҙай ҡатын-ҡыҙ, ир-егет һынында, йә бер бала, йә сәскә, йә таң атыуы, ҡояш байыуы образында булыуы мөмкин. Хоҙай миллион һында, миллион ысулда килә, үҙенең барлығын белдерә тора - ишетергә, күрергә, тойорға өйрәнергә генә кәрәк Уны.


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8 - 14 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№45 (619)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ерҙән яҙһаң - шул яман,**
йәки Тағы ла пай ерҙәре тураһында



5

**Башҡортомдоң рухи хазинаһын...**
индәремә йөкмәп киләм



8-9

**Милли-этник фестиваль...**
башҡорт киноһын үҫтерәсәк



11

**Күңел һыйыныр төйәк -**
ул тыуған йорт, тыуған ауыл



12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Сифат тамғаһы онотолһа ла сифатлы йәшәргә ынтылыш һүнмәне, киреһенсә, был мәсьәлә киҫкенләшә барғандай. Һеҙҙеңсә, бөгөн беҙҙең тормоштоң сифат кимәле нindәй?

***Гөлнара ЯҠШЫБАЕВА, иҡтисад фәндәре кандидаты, Өфө дәүләт авиация техник университеты доценты:*** "Бөтөн донъя сифат көнө"н билдәләү етештерелгән тауарҙар һәм күрһәтелгән хеҙмәттәр сифатын күтәреү һәм был мәсьәләгә етештереүселәр иғтибарын тағы бер тапҡыр йүнәлтеү маҡсатын күҙҙә тота. Хужалыҡ итеүҙең баҙар системаһы, тышҡы иҡтисади бәйләнештәрҙең үҫеш алыуы һәм ирекле конкурентлыҡ илебеҙҙә тауар төрлөлөгөн тәьмин итте һәм уны һайлау мөмкинлегенә юл асты. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, сифат мәсьәләһе киҫкенлеген юғалтмай әле, сөнки ул йыш ҡына туранан-тура кеше сәләмәтлеге һәм мөхитебеҙ хәүефһеҙлеге менән дә бәйле булып сыға. Конкурентлыҡ тауар сифатын бермә-бер күтәреү талабын ҡуйһа ла, намыҫһыҙ етештереүселәр ҙә етерлек. Ҡайһы бер компаниялар һатып алыусы иғтибарын арзан тауары менән йәлеп итергә тырыша. Рәсәй ҡулланыусыларының күпселеге, заман талабына ярашлы, арзанлыға түгел, ә ҡиммәтерәк булһа ла сифатлы һәм файҙалы тауарға өҫтөнлөк бирә башланы. Marketing Index проекты мәғлүмәттәренә ҡарағанда, шундай рәсәйҙәр һаны һуңғы өс йылда ғына 4 процентҡа артып, йәмғеһе 71 процент тәшкил итте. Рәсәйҙәр тауар сифатына ғына түгел, күрһәтелгән хеҙмәттәр сифатына ла талапсан була бара. Мәҫәлән, әгәр берәй магазиндағы сервис уларға оҡшамаһа, респонденттарҙың 78 проценты ҡабат унда инмәйәсәк, тиелә әлеге махсус тикшеренеүҙәр материалында. Әлбиттә, бындай күренештәргә битараф ҡалыу, пассивлыҡ күрһәтеү хәлде төҙәтергә ярҙам итмәй. Бөгөн һәр бер ҡулланыусы сифат өсөн көрәшергә бурыслы, бик булмаһа, ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса йәмғиәттәр аша ла эш итеү мөмкинлеген онотмайыҡ.

***Наилә ФӘТКУЛЛИНА, иҡтисад фәндәре кандидаты, БДУ-ның Сибай институты иҡтисад факультеты деканы вазифаһын башҡарыусы:*** Бөгөнгө йәмғиәт сифат мәсьәләһенә юғары талаптар ҡуя, сөнки был - тауар етештереүме ул, теге йәки был хеҙмәттәр күрһәтеү төрөмө - кешегә файҙа ла, хәүефһеҙлек тә, экологик сафлыҡ та һәм, әлбиттә, эстетик зауыҡ һәм матурлыҡ та тәьмин итергә тейеш, тип ҡарала. Кеше бөгөн тауар йә хеҙмәттәр менән йөрөп, ҡарап, һайлап файҙалана ала икән, тимәк, ул иң яҡшыһына, сифатлыһына өҫтөнлөк бирә, тигән һүҙ. Ә был үҙ сиратында бихисап етештереүселәр "армияһы"на үҙ бурыстарына яуаплыраҡ ҡарарға, сифатлы тауар етештереп, уны фирмаһы брендына әүерелдереү маҡсатына өлгәшергә стимул бирә. Фәҡәт шул саҡта ғына бит етештереүсе үҙ предприятиеһын баҙар шарттарына яраҡлаштырып йәшәтә ала. Ә кем сифат һынауын үтә алмай, ул "арбанан" төшөп ҡала, тимәк.

Йәш быуынға төплө белем биреү ҙә шул уҡ сифат мәсьәләһенә ҡағыла. Мәҫәлән, беҙҙең Сибай институты студенттары Enactus бизнес-идея конкурсының Бөтөн Рәсәй этабы еңеүсеһе булараҡ, яңыраҡ ҡына Пекиндан Донъя кубогында ҡатнашып ҡайтҡан икән, тимәк, беҙҙең уҡыу йорто ла милли мәғариф сифатын күтәреүгә тос өлөш индерә, тигән һүҙ

(Дауамы 2-се биттә).

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЙӘШӘҮ СИФАТЫ ЮҒАРЫ

**Өфө Рәсәйҙең йөҙ эре ҡалаһы интеграль рейтингында һигеҙенсе урынға күтәрелде. Был рейтингты 2013 йылдың һөҙөмтәләре буйынса "Урбаника" Территориаль планлаштырыу институты төҙөй. Былтыр был исемлектә баш ҡала туғыҙынсы урында ине.**

Рейтингтың тәүге тиҫтәһенә шулай уҡ Нижневартовск, Төмән, Сочи, Екатеринбург, Краснодар, Көньяҡ Сахалинск, Белгород ингән. Мәскәү - 25-се, Санкт-Петербург - 20-се, Силәбе 39-сы урында. Лидер итеп Сургут ҡалаһы танылған. Был рейтинг юғары тормош кимәле һәм ҡала мөхитенең сифаты буйынса билдәләнә.

Баш ҡалала йәшәүсе һәр кешегә эшләү өсөн дә, ял итеү, спорт менән шөғөлләнеү, күңел асыу өсөн дә бар шарттар булдырылған. Рейтингта яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү алып барылған эшмәкәрлектең дөрөҫлөгөн тағы бер тапҡыр раҫлай.

Ҡалаларҙың интеграль рейтингы дүртенсе йыл рәттән төҙөлә. Тикшеренеүҙең маҡсаты - эре ҡалаларҙағы тормоштоң "хаҡы" менән "сифаты" күрһәткестәренең нисбәтен сағыштырыу.



✓ *Беҙҙең урамға почтальон һәр йортҡа һуғыла - тимәк, барыһы ла ниндәй ҙә булһа баҫма яҙҙырып уҡый. Кәм тигәндә, район гәзитен булһа ла алдыралар. Матбуғат баҫмаларына хаҡ артһа ла, беҙҙең яҡтарҙа гәзит уҡыу кәмемәне.*



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ҠАРАШЫБЫҘҘЫ... милли гәзиттәребеҙ ҙә байыта




**"Киске Өфө" гәзитен байтаҡ йылдар алдыраһың шикелле, әллә оҡшаймы?" - тип һорап, күршем аптыратып ҡуйҙы әле. "Оҡшамаһа, алдырмаҫ инем", - тип яуап бирҙем уға.**

Эйе, тәүҙә: "Алдырып ҡарайым әле, нимәләр яҙалар икән?" - тигән ҡыҙыҡһыныу менән яҙылғайным был гәзиткә. Тора-бара был гәзит шул тиклем күңелгә ятты - яҙылмай булдыра алмайым. Шулай итеп, йортобоҙға килгән "Башҡортостан-йома", "Йәшлек", "Һаҡмар" гәзиттәренә, "Шоңҡар", "Аҡбуҙат", "Һәнәк" журналдарына, бер-нисә федераль гәзиткә "Киске Өфө" лә өҫтәлде. Гәзит-журналдарҙы беҙҙең ғаиләлә барыһы ла -10 йәшлек Байрас улыбыҙ ҙа, ҡатыным да, үҙем дә яратып уҡыйбыҙ. Байрас "Киске Өфө"ләге "Алдар менән Ерәнсә ҡоро"н көтөп ала. Ете йәшлек Ислам улыбыҙ ҙа ағаһынан ҡалышмаҫҡа тырыша, тик әлегә гәзит-журналдарҙы һүрәттәре буйынса ғына "уҡый". Әйткәндәй, быйыл ул беренсе синыфҡа уҡырға барҙы. Башҡорт матбуғат баҫмаларын ул да тиҙҙән үҙе уҡый башлар әле бына.

Беҙҙең урамға почтальон һәр йортҡа һуғыла - тимәк, барыһы ла ниндәй ҙә булһа баҫма яҙҙырып уҡый, тигән һүҙ. Кәм тигәндә, район гәзитен булһа ла алдыралар. Күрше урамда ғына йәшәүсе атайымдар ҙа тиҫтәләгән баҫма алдырып уҡый. Матбуғат баҫмаларына хаҡ артһа ла, беҙҙең яҡтарҙа гәзит уҡыу кәмемәне, тип әйтмәксемен.

"Киске Өфө"гә килгәндә, был гәзит минә асыҡлығы, проблемаларҙы ҡыйыу, үткер яҡтыртыуы менән танһыҡ. "Диалог", "Тарихи хәҡиҡәт" рубрикаларын айырыуса көтөп алам. Халҡыбыҙ менән бәйләнеш ентәре ныҡ был гәзиттең. Райондарға ла йыш сығып йөрөйҙәр шикелле. Ни тиһәң дә, урындағы мәсьәләләрҙе урында хәл итеү яҡшыраҡ бит. Был гәзит хеҙмәкәрҙәре, авторҙары артабан да шулай халыҡҡа дөрөҫлөктө асып һалыуҙы дауам итһен. Сөнки донъялағы, илдәге, республикалағы тегәйәки был мәсьәләгә ҡарашыбыҙ милли мәғлүмәт саралары ярҙамында ла формалаша бит.

**Илдар РАУИЛЕВ.**
**Баймаҡ районы Темәс ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Сифат тамғаһы онотолһа ла сифатлы йәшәргә ынтылыш һүнмәне, киреһенсә, был мәсьәлә киҫкенләшә барғандай. Һеҙҙеңсә, бөгөн беҙҙең тормоштоң сифат кимәле ниндәй?*

***Йәүҙәт РӘХМӘТУЛЛИН, хеҙмәт ветераны:*** Элек совет тауарҙарының иң яҡшыларына Сифат тамғаһы һуғып сығарыла ине. Ул саҡ халыҡ контроле бик шәп эшләне: урлашыу булһынмы, алдаҡмы - шундуҡ эләктереп тә ала ине. Конвейерҙан сыҡҡан продукцияны ла сифат контроле тикшереп кенә торҙо. Шуға ла ул саҡта етештерелгән халыҡ ҡулланыуы тауарҙары ышаныслы булды, халыҡҡа оҙаҡ хеҙмәт итте. Хәҙер берәй нәмә һатып алам тиһәң - бәлә генә. Тауар күп, уныһы һәйбәт, ә бына шулар араһынан сифатлыһын нисек айырырға? Һәм, ғөмүмән, бармы ул сифатлы тауар? Кизе-мамыҡ, йөн кеүек тәбиғи сеймалдан етештерелә торған кейем-һалым бөттө, тиһәң дә була. Үзбәкстандан килтерелгән иске кейемдәрҙе генә иҫәпкә алмағанда. Әлдә улар бар. Ҡаса-боҫа ғына кизе-мамыҡтан сифатлы иске кейем, трико-майка һатып торалар, ә баҙарҙа шығырҙап торған синтетик туҡыма баҫты: кейеме лә, хатта түшәк-япмалар ҙа, тейнәң, оҫҡон сәсрәп торған материалдан тегелә. Ә бит ул кеше сәләмәтлеге өсөн файҙалы нәмә түгел. Бер ниндәй санитар-гигиена нормалар һанға һуғылмай, тиер инең, юҡ хәҙер ундай сикләү-тыйыуҙар. Кем нимә теләй, шуны эшләй. Әйтеүемсә, һанға күбәйҙе тауар, ә сифат юғалды. Күпселеген арзан материалдан, нигеҙҙә бер-ике тапҡыр ҡулланыуға иҫәпләнгән әйберҙәр сығарыла. Был махсус шулай эшләнә, күрәһең, ҡабат-ҡабат һатып алһындар өсөн. Алюмин һауыт-һабаны матурлап буяйҙар ҙа, тефлон тип ҡиммәт хаҡ ҡуялар. Уның да һаулыҡҡа зыяны ҙур - буяуы ҡубып сыға башлай. Ә инде аҙыҡ-түлек тураһында әйтеп тә тормайым: ул баҙар, ул магазин кәштәләреме - уйынсыҡ тәтәйгә оҡшаған алмалар һәм башҡа емеш-еләктән һығылып тора. Айырыуса сит илдәрҙән килтерелгән риҙыҡҡа хәүеф менән ҡарайым мин, сөнки гены үҙгәртелгән аҙыҡ-түлек хаҡында күп уҡығаным бар. Бер яҡтан, сит илдән аҙыҡ-түлек индереүҙе сикләү бик йәтеш тә булыр ине ул, тик кәштәләрҙә генә бер ниндәй үҙгәреш күренмәй. Санкция, тигәндәре, күрәһең, ҡурҡытыу ғына булды. Үҙебеҙҙең ауыл етештереүселәренең сифатлы, экологик таҙа ризыҡына ни етә һуң инде!

***Айгөл ШӘРИПОВА, Өфө нефть техник университетының иҡтисад факультеты студенты:*** Сифат тураһында һүҙ барғанда, ғәҙәттә, ябай ҡулланыусы иң элек тауар һәм аҙыҡ-түлек сифатын күҙҙә тоталыр, ләкин сифат - ул бик киң төшөнсә, етештерелгән тауарҙан башлап, тормош рәүешебеҙҙе тиклем ошо йәһәттән сығып баһа бирелә. Сифатлы белем йәки медицина ярҙамы алыуы, сифатлы туҡланыу йәки сифатлы итеп төҙөлгән йортта йәшәүме, йә булмаһа, экологик таҙа, саф, тимәк, сифатлы һауа һулау мөмкинлегеме - ғөмүмән, тормош сифатлыһына ҡағылышы булған бөтөн факторҙар ҙа мөһим беҙгә. Ошо юҫыҡтан сығып ҡарағанда, беҙҙең тормош сифатын уртаса тип әйтеп буламы икән - шуға яуап эҙләп ҡарайым. Күп нәмә хәҙер аҡсаға бәйле, түләүле хеҙмәттәр күләме артҡандан-арта, ә беҙҙәге уртаса эш хаҡы йәки пенсия күләме үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм. Әммә юғарыраҡ "ҡаттан" күренеш һәүетемсә тойолоуы ла бар. Мәҫәлән, "12 йыл эсендә Рәсәйҙә халыҡтың тормош сифаты һәм көнкүреше һиҙелерлек үҙгәрҙе,- тип хәбәр итә Бөтөн Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге (ВЦИОМ).- Был иң тәүҙә торлаҡ шарттарының һәм туҡланыу сифатының яҡшырыуында" күренә икән. Аҙыҡ-түлек һатып алыр өсөн дә рәсәйҙәр хәҙер арзан магазин артынан ҡаланың бер осонан икенсеһенә ашыҡмай, ә ҡайҙа сифатлырағы бар - шуның менән ҡыҙыҡһына, тиелә Үҙәктең отчет материалында. Күптәр өсөн ғаиләһе менән сит илгә барып ял итеп ҡайтыу ҙа, машиналы булыу ҙа хыял түгел хәҙер. Үткән быуаттың 90-сы йылдар аҙағында Рәсәйҙәге ғаиләләрҙең ни бары 8 проценты ғына машиналы булһа, һуңғы йылдарҙа бындай бәхетлеләр һаны 45 процентҡа яҡын тәшкил итә. Халыҡтың тормош кимәле күрһәткестәренең тағы бер өлкәһе - көнләп яңыра барған технологик ҡаҙаныш - гаджеттарҙың арзаная һәм күптәр өсөн уның менән файҙаланыу мөмкинлеге тыуыуы. Әлеге көндә рәсәйҙәрҙең 30 процентҡа яҡыны һатыуҙа яңы өлгөләре пәйҙә булыу менән, кеҫә телефонын алыштырып, яңыһын һатып алыу мөмкинлегенә эйә; ә 15 проценты - боҙолоу йә юғалыу сәбәпле, шулай уҡ ҡайтанан һатып ала, күпселек кешенең бер нисә телефоны бар. Шулайын шулай ҙа... Тик барыбер әлеге лә баяғы түләүле хеҙмәттәр күләменә өҫтәлеп, коммуналь хеҙмәттәр өсөн дә квитанциялағы һандар "түнәрәкләнә" барғанда, күсемһеҙ милек өсөн һалым иңгә ятҡанда, үҙгәрешһеҙ ҡалып килгән эш хаҡына һәм уртаса 10 мең пенсияға сифатлы йәшәүҙең нисек була икәнлеген мин, мәҫәлән, имтихан мәлендә уҡытыусыма бер нисек тә аңлата алмаҫ инем...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле бара. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

● Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн ноябрҙә **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән **50673** индекслыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.

● Ноябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **С. Руденконың "Башкиры"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ башҡортса **"Дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуанyр.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ил Хөкүмәтендә социаль мәсьәләләргә яуаплы булған вице-премьер Ольга Голодец эш сәфәре менән Өфөлә булып китте. Сәфәре сиктәрендә Ольга Голодец "Әсә һәм бала" клиникалар селтәренең перинаталь үҙәген асыуҙа ҡатнашты, баш ҡаланың бер нисә белем биреү, медицина һәм мәҙәниәт учреждениеһында: 39-сы гимназияла, Республика клиник дауаханаһының акушер-гинекология корпусында, Нестерев исемендәге Башҡорт художество музейының яңы бинаһында, 78-се балалар баҡсаһында булды.

✓Ҡытайға сәфәр барышында үҙ-ара хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүҙәргә ҡул ҡуйылды. Шулай уҡ бер нисә шәхси килешеү төҙөлдө. Шуларҙың береһе Ҡытайҙы башҡорт балы менән тәьмин итеүгә ҡағыла. Гунцинчэн ҡалаһында башҡорт балы һатылған тәүге магазин асылды. Татлы аҙыҡтың тәүге тоннаһы Ҡытай магазиндары кәштәләренә ҡуйылған да инде.

✓Ҡытайҙың Цзянси провинцияһында "Башҡортостан Республикаһы бизнесы көндәре" асылды. Башҡортостан делегацияһы составында Хөкүмәт ағзалары һәм 40-тан ашыу бәләкәй һәм урта бизнес вәкиле ҡатнашты. Башҡортостан предприятиелары Ҡытай компаниялары менән ауыл хужалығы, туҡыу сәнәғәте һәм металлургия өлкәһендә әүҙем хеҙмәттәшлек итеүгә өмөтләнә, осрашыуҙарҙа шул турала һүҙ барҙы ла инде. Шулай уҡ Ҡытай менән хеҙмәттәшлек барышында нефть химияһы, үҫемлекселек продукцияһын тәрән эшкәртеү һәм инфраструктураны үҫтереү кеүек йүнәлештәр ҙә тикшерелде.

✓Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында 2015-2017 йылдарға Башҡортостан бюджеты проекты беренсе уҡыуҙа ҡабул ителде. Документҡа ярашлы, 2015 йылда республика бюджетының дефициты 14 миллиард һум, килем 114,9 миллиард һум, сығымдар 128,9 миллиард һум кимәлендә ҡуҙаллана.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында даими профессиональ нигеҙҙә эшләүсе депутаттарҙың һаны 22-нән 21-гә кәмене. Әлеге ваҡытта республика парламентында даими нигеҙҙә Дәүләт Йыйылышы рәйесе һәм уның урынбаҫарҙары, шулай уҡ комитет етәкселәре һәм уларҙың урынбаҫарҙары эшләй. Депутаттар һаныннң кәмеүе Торлаҡ сәйәсәте һәм инфраструктур үҫеш буйынса комитет рәйесе урынбаҫары Рөстәм Ишмөхәмәтовтың Дәүләт Думаһына депутат мандатын алыу менән бәйле.

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# АЙМЫЛЫШ ЮЛДАРҘА



**Баш ҡалабыҙҙа машиналар ташҡыны арта барған һайын, юл хәрәкәте ҡатмарлаша һәм транспорт тығындары ҡотолғоһоҙ төҫ ала бара. Был турала күп яҙыла, ләкин бер үк темаға буш хәбәр һатыуҙан барыһы ла ялҡып та бөттө, шәйт.**

Пассажирҙар ташыу хеҙмәте беҙҙә бынан ун йыллап элек нисек булған, шул кимәлдә ҡала килә. Заманына күрә - әмәле, тигәндәй, ошо өлкәлә ниндәйҙер яңылыҡ, юл йөрөүсе халыҡ өсөн уңайлы һәм оператив ҡарарҙарҙың хәл ителеүенә бик тә шаһит булғы килә. Мәҫәлән, Сипайлово биҫтәһенән ҡаланың үҙәк өлөшөнә килеп еткәнсе, тик сәстәрең ағармай. Шул уҡ ваҡытта үҙәк тарафтарына илтеүсе һәм уң ҡулдан бер нисә урамға армыттарын ебәреүсе Салауат Юлаев проспекты, миненсә, барыбер һаман булһа тулы ҡеүәтенә файҙаланылмай. Бер нисә йыл элек иркен, тәүлектең теләһә ҡайһы мәлендә лә аулаҡ ошо юлдан тиҙ йөрөшлө 75-се маршрут булдырылғайны. Иркен тын алып ҡалғайныҡ шул мәл. Иртәнге теүәл 07.00 һәм 08.00 сәғәттәрҙә "Королев" туҡталышынан ҡуҙғалып китә лә, Сипайловоны сыҡҡас, Салауат проспектынан елдәр уйнатып ҡына елдереп килә лә етә инек эш урындарыбыҙға. Бер миҙгелгә лә етмәне шатлығыбыҙ: әллә "Башавтотранс" компанияһы был маршрутты, зыянға эшләй, тип тапты, әллә башҡа берәй сәбәп килеп сыҡты - йылғыр "Нефаз"дар йөрөүҙән туҡтаны. Шуныһы ғәжәп: Салауат проспекты, ғөмүмән, пассажирҙар транспорты өсөн файҙаланылмай. Был ни менән аңлатыла икән - ошо хаҡта бик тә белге килә.

**Фәрит МЫРҘАГИЛДИН.**

# ИСЕМЛЕКТӘ НИҢӘ БАШҠОРТТАР ЮҠ?




**Быйыл Өфө ҡалаһы башҡорт теле уҡытыусыларының август кәңәшмәһендә бер бик шәп китап һатып алдым, тип ҡыуанып та өлгөрмәнем, артынса уҡ күңелһеҙ тойғолар кисерергә тура килде.**

"Народы России" тип аталған китап ул. 2014 йылда Мәскәүҙә "Росмэн" нәшриәтендә баҫылған. Арыу ғына биҙәлгән, сифатлы төҫлө тышлыҡта, текстарға төҫлө милли кейемдәге ҡыҙ-егеттәр һүрәттәре бирелгән. "Уҡыусыларыма Рәсәйҙә йәшәгән милләттәр тураһында мәғлүмәт биргәндә, төрлө кисәләргә әҙерләнгәндә бик тә кәрәге тейер был китаптың" , тип, ысын күңелдән ҡыуанып һатып алғайным уны. Өйгә ҡайтҡас та китап менән танышырға ултырҙым. "Инеш һүҙ" бүлегендә, Рәсәйҙә рус милләте 80 процент тәшкил итә, унан ҡала татарҙар һәм украиндар килә, ә башҡорт халҡы һан буйынса 4-се урында тора, тип яҙылған. "Дүртенсе урында торғас, туған халҡым тураһында мәғлүмәт киң йөкмәткеле булырға тейеш бында", - тип уйлап, артабан "Башҡорттар" тигән бүлекте эҙләйем. "Волга буйы халыҡтары" тигән бүлектә сыуаш, мордва, мари, татар халҡы тураһында мәғлүмәт бар, милли кейем кейгән вәкилдәре лә күрһәтелгән. Әммә башҡорттар тураһында бер һүҙ ҙә юҡ. Артабан "Кавказ халыҡтары" тигән бүлек башлана. Башҡорттар тураһында "Урал халыҡтары" тигән бүлектә яҙылғандыр, ахыры, тип өмөтләнеп, ары китәм. Аптыраш! "Урал халыҡтары" тигән бүлек бөтөнләй булмай сыҡты. Ҡыйын булып китте күңелгә. Уйҙарымдан уйылып йөрөйөм бына.

"Балалар энциклопедияһы" тип атап баҫылған бик кәрәкле фәнни-популяр әсбап авторҙары ниңә башҡорт халҡының Рәсәй халыҡтары гөлләмәһендә лайыҡлы урын алырға тейешле конституцион хоҡуғын һанға һуҡманы икән? Мин быны менән һис килешмәйем.

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА,**
**башҡорт теле уҡытыусыһы.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# РУХЫБЫҘ ҺЫНМАҺЫН!

**Өлфәт ҠОБАҒОШОВ, скульптор:** Бөгөн беҙҙә кадрҙар, бигерәк тә милли кадрҙар әҙерләү мәсьәләһе бик киҫкен тора. Күп кенә юғары урындарҙа профессионал булмаған, халыҡ хәстәрен аңламаған кешеләр эшләй. Етәксе кадрҙарҙы махсус әҙерләү тигән нәмә онотолдо ла шикелле инде. Мәҫәлән, байтаҡ йәштәребеҙ хәҙер Мәскәү, Санкт-Петербург, сит ил юғары уҡыу йорттарында уҡый, яҡшы белем ала, уҡыған саҡта төрлө йәмәғәт эштәрендә ҡатнашып йөрөп, тәжрибә туплай, ләкин уларҙың республикаға ҡайтып, эш таба алмай йөрөгәнен дә күргән-ишеткән бар. Улар урынлаша торған, уларҙың белеме бик тә кәрәккән урындарҙа, әлбиттә, йә пенсионерҙар, йә "ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ" менән урынлашҡан кешеләр эшләүе лә сер түгел.

Әлбиттә, бынан тыш та бик күп хәл итәһе мәсьәләләр бар. Мәҫәлән, минең эсте бошорған тағы бер нәмә: һуңғы ваҡытта этномәҙәниәт, этнофестиваль һүҙҙәре йыш ҡулланыла башланы. Ә милли мәҙәниәт, милли фестиваль, милли сәнғәт тигән һүҙҙәр ҡайҙа булған? Оҙаҡламай этноәҙәбиәт тип тә һөйләй башларбыҙмы? Был терминдарҙы сит ерҙә, беҙгә билдәһеҙ милләт тураһында һүҙ барған осраҡта ҡулланырға мөмкин. Ә башҡорт мәҙәниәте тураһында һүҙ барғанда ул мотлаҡ "милли мәҙәниәт" тигән һүҙ менән йөрөргә тейеш. Этномәҙәниәт тиер өсөн беҙ бит ҡайҙандыр күсеп килгән халыҡ түгел.

Терминдар тураһында һүҙ сыҡҡас, шуны ла әйтәйем әле: беҙ хатта республикабыҙҙың русса дөрөҫ атамаһын да дөйөм ҡулланылышҡа индерә алмайбыҙ һаман. Конституцияла аҡҡа ҡара менән "Башҡортостан Республикаһы - Республика Башкортостан" тип яҙылһа ла, "Башкирия" тип һөйләүгә юл ҡуябыҙ. Ошондай ваҡ-ваҡ күренгән ҡытыршылыҡтар ҙа халыҡтың рухын ҡаҡшата бит.

Ә шулай ҙа халҡыбыҙ, бигерәк тә йәштәребеҙ, үҙебеҙҙең Ер йөҙөндә иң боронғо эпосты йөрөткән тере халыҡ, үҙенсәлекле һәм бай мәҙәниәтле милләт булыуыбыҙҙы онотмаһа, күңелебеҙҙә ата-бабаларҙан килгән моң һаҡланһа, рухты былдай ғына ҡытыршылыҡтар һындыра алмаҫ, тием.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*КИНӘЙӘЛӘП...*

# ҺЕҘ БИТ АҘСЫЛЫҠ...

**Һеҙ ҡараныҡыҙмы икән, ә мин бик күптән "Кәкүк ояһы" тип аталған кино ҡарағайным. Уның спектаклен беҙҙең Башҡорт дәүләт академия драма театрында ла бик оҫта итеп ҡуйҙылар. Һеҙгә киноның йөкмәткеһен һөйләргә йыйынмайым, бер фекерем менән генә уртаҡлашам.**

Ул кинолағы һәм сәхнә әҫәрендәге индеец образы оҡшай миңә. Аҡылдан яҙған ауырыу, һәр ауыр эште башҡарыусы робот һымаҡ ҡыланһа ла, үҙгәртеп булмай торған хәлгә, ҡайғыға ҡалыуының сәбәбен бик аҡыллы итеп аңлата индеец: "Һәр төндә минең янbackьма боронғо атабабаларыбыҙҙың рухтары килә лә: "Ниңә һеҙ килмешәктәргә илебеҙҙе баҫып алырға юл ҡуйҙығыҙ?" тигән һорау биреп, яуап көтә", - ти...

Ундай һорауҙы ата-бабаларыбыҙҙың рухтары беҙгә лә бирәләр инде ул, тип уйлап ултырам бына. Тик беҙ уларҙы ишетмәйбеҙҙер. Ҡолаҡтарыбыҙ ҡатыланып, рухтарыбыҙ тупаҫланып бөткән бит инде. Ҡаты битрафлыҡ йоҡоһонан да уяна алмайбыҙ әле. "Башҡорттар киң күңелле, ҡунаҡсыл халыҡ" тигән күтәрмәләүҙән ғорурланып йәшәй бирәбеҙ...

Ошо урында Мостай Кәримдең "Атайым һөйләгәйне" тип исҡә алған бер хәтирәһен һөйләп үтәйем. Ҡыш уртаһында бик ҡаты буран ҡупҡан, ти. Бер әбей менән бабай йәшәгән өйҙөң ишеген буранда аҙашҡан юлсылар шаҡыған. Бабай: "Ишек һәр саҡ асыҡ, бикле түгел, инегеҙ!" - тип саҡырған. Әбей менән бабай юлсыларҙы булғаны менән туҡландырып, йылы урын биреп, ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән, ти. Ә буран күп көндәр буйы тынмай ҙа тынмай икән. Юлсылар өйҙәге үҙҙәре теләгән урынға күсеп ултырышып, үҙҙәре теләгән ризыҡты алып туҡланып, үҙҙәрен хужаларса тота башлағас, бабай итәғәтле генә итеп юлсыларҙы тәртипкә саҡырған. Ә юлсылар: "Тауышығыҙ сыҡмаһын, һеҙ бит аҙсылыҡта, ә беҙ күмәкбеҙ!" - тип яуап биргән, ти. Бына шулай, беҙ ҙә үҙ йортобоҙҙа иҡәнебеҙҙе онотоп, үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы артҡы планға күсереп, күпселек алдында итәғәтлек һаҡлап, тыныс ҡына йәшәп ятабыҙ инде. Ярай ҙа, килгән ҡунаҡтар йорт хужаларының ошо сифаттарын, ҡунаҡсыллығын баһалай белһә...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев РФ Оборона министрлығының "Ҡырымды ҡайтарған өсөн" миҙалы менән бүләкләнде. Хәйҙәр Вәлиев етәкселек иткән коллектив Ҡырымдың Дәүләт Советына һәм Белогорск районы территорияһында муниципаль берәмектәрҙең вәкәләтле органдарына депутаттар һайлауҙы ойоштороуҙа ҙур ярҙам күрһәтте.

✓Муниципаль берәмектәр араһында барған "Башҡортостандың мәҙәни баш ҡалаһы" мәҙәни ваҡиғалар марафоны республика буйлап үҙенең танталалы сәйәхәтен тамамлап, Өфөгә ҡайтты. "Башҡортостандың мәҙәни баш ҡалаһы" марафоны 2014 йылдың 23 ғинуарында башланғайны. 11 айҙа марафон республиканың бөтә ҡалаларында һәм районадарында булды. Өфө республиканың марафонды ҡабул иткән 63-сө нөктәһе булды. "Донъяны матурлаҡ итәйек!" девизы аҫтындағы Мәҙәниәт йылы штандарты Өфөлә 22 декабргә - Мәҙәниәт йылын рәсми рәүештә япҡанға тиклем буласаҡ.

✓Республикала юридик белем биреүҙең 65 йыллығы билдәләнде. Бөтә Союз ситтән тороп уҡыу юридик институты Өфөлә 1949 йылда асылған. 1963 йылда - филиал Свердловск юридик институты факультетына, 1972 йылда Башҡорт дәүләт университеты факультетына әйләндерелә. Үҙенең хәҙерге статусына юридик факультет 1999 йылда ғына эйә була. Юғары уҡыу йортонда хәҙер өс мең студент уҡый, уларға 22 доктор һәм 63 юридик фәндәр кандидаты белем бирә. Үҙ аспирантураһы һәм докторантураһы бар.

✓Мәләүеҙә үҙенсәлекле һәйкәл асылды: Дан бульварында данлыҡлы "Универсал-2" тракторы постаментҡа урынлаштырылды. Һәйкәлгә "Ауыл хужалығы һәм тыл хеҙмәткәрҙәренә арнала" тигән яҙыу нығытылды.

✓Сочиҙа Рәсәй Федерацияһы Мәҙәниәт министрлығы ярҙамында бер енсе Бөтә Рәсәй халыҡ мәҙәниәте фестивале һәм күргәҙмәһе уҙҙы. Тәүге таптыр бер майҙансыҡта Рәсәйҙең 85 субъектынан иң яҡшы халыҡ коллективтары йыйылды. Фестивалдә Башҡортостандан республиканың алдынғы коллективтарының береһе - Учалы "Ләйсән" халыҡ бейеүҙәре ансамбле сығыш яһаны.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Башҡортостандың үҫемлек-символы тип ҡурай билдәләнде. Ул 26040 тауыш йыйҙы, йәғни был 47 процент тәшкил итә. Дүрт ай дауамында йүкә лә лидер булып килде, әммә һөҙөмтәлә 40 процент ҡына тауыш йыя алды.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БАШ ҠАЛАНЫҢ СТАТУСЫ...

## Закон менән нығытылырмы?

**2013 йылдың апрелендә Өфө ҡала советы депутаттары БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттарына тарихта беренсе тапҡыр баш ҡала статусын закон менән нығытыу тураһында инициатива менән сығыш яһағайны. Шунан һуң ул йыл ярым дауамында төрлө кимәлдәге власть структураларында тикшереү үтеп, 29 октябрҙә уҙғарылған сираттағы сессияла ҡабаттан ҡарауға сығарылды.**

Закон проектының йөкмәткеһе шунан ғибәрәт: Өфө, Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы булараҡ, республиканың иҡтисади, мәҙәни һәм фәнни үҙәге булып тора, транспорт, торлаҡ-коммуналь хужалығы системаларына көсөргәнеш юғары. Бынан тыш, ҡала мәҙәни мираҫ объекттарын популярлаштырыу, ҙур халыҡ-ара, төбәк-ара һәм башҡа сараларҙы үткәреү буйынса яуаплы. Был бурыстарҙы атҡарыу урындағы бюджеттан ҙур сығымдар талап итә. Шуға күрә депутаттар был сығымдарҙың бер өлөшө республика бюджетынан компенсацияланыуын талап итеүҙе ғәҙел тип һанай. Бындай компенсация мөмкинлеге 1996 йылда ҡабул ителгән законда ҡаралған, әммә ул республика бюджетында сағылыш тапмай. Ҡала Советы депутаттары сессияла раҫлаған закон проектының яңы редакцияһы ошо сығымдарҙы финанслауҙың яңы тәртибен тәҡдим итә лә инде.

Шул уҡ ултырышта 2011 йылда ҡабул ителгән Ревизия комиссияһының контроль-иҫәп органы тураһындағы положениеһына ла үҙгәрештәр индерелде. Быға тиклем Ревизия комиссияһы административ тәртипте боҙоуҙар булған осраҡта яҙма күрһәтмәләр биреү менән генә сикләнһә, хәҙер улар үҙаллы штраф һалырға ла мөмкин. Был ҡала бюджетын үтәү һәм ҡала милкен файҙаланыу мәсьәләләренә ҡағыла. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексында бюджет аҡсаһын маҡсатҡа ярашлы тотонмаған вазифалы кешеләргә - 4-5, предприятие һәм ойошмаларға 40-50 мең штраф һалыу ҡаралған. Исраф ителгән бюджет аҡсаһы бюджетҡа ваҡытында кире ҡайтарылмаған осраҡта штраф күләме 4-5 һәм 40-100 мең һум тәшкил итә.

Шулай уҡ ултырышта депутаттар Өфө ҡалаһының 2013 - 2018 йылдарға Инвестиция стратегияһын тормошҡа ашырыу барышын тикшерҙе. Ул былтыр йәйгеһен генә раҫланһа ла, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә һиҙелерлек һөҙөмтәләр биргән. Уҙған йылда төп капиталға инвестициялар күләме беренсе тапҡыр 100 миллиард һумдан ашып китте. Сит ил инвестициялары ла 6,5 тапҡырға артҡан. Быйылғы геосәйәси хәл-торош һәм дөйөм иҡтисади үҫеш темптарының әкренәйеүе Инвестиция стратегияһын тормошҡа ашырыуға артыҡ йоғонто яһамаған. Әммә йыл йомғаҡтары буйынса ул ҡабаттан ҡаралыуы ихтимал. Был мәсьәләгә депутаттар йәренгә, майҙа ҡабат әйләнеп ҡайтасаҡ.

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# БЕРҘӘМ САФТАРҘА...

## Мәскәү башҡорттары ла атланы

**Халыҡтар берҙәмлеге көнө айҡанлы "Беҙ берҙәм" лозунгыһы аҫтында илһөйәрҙәр сафы тантаналы рәүештә Мәскәү урамдары буйлап үтте. Был сараға бөтәһе 75 меңгә яҡын кеше ҡушылды.**



Унда Рәсәй парламенты партияларының бөтә лидерҙары ла - сәйәси дәғүәселәр: Дәүләт Думаһы вице-спикеры, "Берҙәм Рәсәй"ҙең Генераль советы секретары Сергей Неверов, "Ғәҙел Рәсәй" партияһы рәйесе Сергей Миронов, ЛДПР лидеры Владимир Жириновский һәм КПРФ лидеры Геннадий Зюганов тәү тапҡыр бергә ҡатнаштылар. Бынан тыш, тантанала Рәсәйҙең күпселек төбәктәре, милли республикалар вәкилдәре һәм баш ҡалала йәшәүсе төрлө халыҡтарҙың яҡташлыҡ ойошмалары, шул иҫәптән Башҡортостандың Мәскәүҙәге яҡташлыҡ йәмғиәтенең 400-ҙән ашыу ағзаһы ҡатнашты.

Акция милләте, йәшәгән урынына ҡарамаҫтан, рәсәйҙәрҙең берлеге, милләт-ара татыулыҡ һәм теләктәшлек рухында үтте. Ул шулай уҡ тышҡы сәйәси ҡатмарлыҡтар осоронда Рәсәйҙең дәүләт сәйәсәтенә ышаныс белдереү ҙә ине.

Башҡортостандың Мәскәүҙәге яҡташлығы милли республикалар вәкиллектәре сафында атлаусы иң күп һанлы төркөм булды. Башҡортостандың Мәскәү һәм Санкт-Петербургтағы студенттар һәм аспиранттар ассоциацияһының 200-ҙән ашыу ағзаһы, шулай уҡ Мәскәүҙә йәшәүсе яҡташтарыбыҙ Башҡортостан флагтары һәм "Рәсәй төбәктәре менән көслө", "Беҙ берҙәм", "Путин - беҙҙең президент", шулай уҡ "Күмәк ағас дауылдан ҡурҡмаҫ" тигән һәм башҡа шундай башҡорт мәҡәл-әйтемдәренең русса тәржемәһе яҙылған лозунгылар тотоп, ҡурай моңдары яңғыратып, баш ҡала урамдарынан үтте.

"Көнбайыш бөгөн Рәсәйҙе ныҡлыҡта һынай, ләкин беҙ быға үҙебеҙҙең берҙәмлек, татыулыҡ менән яуап торорға бурыслыбыҙ, - ти "Башҡортостан яҡташлығы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы идараһы ағзаһы Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Римма Ҡарасурина. - Был тап башҡорт әкиәтендәге кинәйә - һепертке һымаҡ: уны берәмләп һындырыуы бик еңел, ә бөтәһен бергә - мөмкин түгел. Бөгөн беҙгә милләтебеҙгә, тотҡан динебеҙгә, ағза булып торған партиябыҙға ҡарап, бүлгеләнмәҫкә, төптән берҙәм булып йәшәргә кәрәк".

**Алевтина КРЫЛОВА.**

*УРА!*

# ҠУРАЙЫБЫҘ ЕҢДЕ!



**31 октябрҙә "Рәсәй аллеяһы" бөтә Рәсәй экологик-патриотик акцияһында тауыш биреү тамамланды. Дүрт ай дауамында илдең өлкә, край һәм республика халҡы Севастополь ҡалаһында Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә үҫкән ағастар һәм үҫемлектәр аллеяһы күрһәтеләсәк үҫемлекте һайланы. Төрлө тауыш биреү юҫығында йәмғеһе 3,5 миллионға яҡын кеше тауыш бирҙе.**

Тауыш биреү һөҙөмтәһендә һәр төбәк үҙенең традицион, үҙ тәбиғәте, тарихы һәм мәҙәниәте менән бәйле булған үҫемлекте: ағас, ҡыуаҡ, үлән йәки сәскәне һайланы. Яҡынса мәғлүмәттәргә ярашлы, Башҡортостан Республикаһының үҫемлек-символы тип ҡурай билдәләнде. Ул 26040 тауыш йыйҙы, йәғни был 47 процент тәшкил итә. Дүрт ай дауамында йүкә лә лидер булып килде, әммә һөҙөмтәлә был үҫемлек 40 процент ҡына тауыш йыя алды. Дәғүә итеүселәр исемлегендә шулай уҡ Салауат Юлаев сирене ҡыуағы, пирамидаль тирәк ағастары һәм мәтрүшкә булды.

Башҡортостандың күрше төбәктәрендә шулай уҡ йәшел символдар һайланды. Силәбе өлкәһендә тауыш биреүҙә - ирга, Ырымбурҙа - Шренка тюльпаны, Пермдә гинкго беренсе урынға сыҡты. Татарстанда һәм Һамар өлкәһендә ваҡ япраҡлы йүкә һәм йөрәк рәүешендәге япраҡлы йүкә лидерлыҡ итте.

Конкурс һөҙөмтәләре бөтә төбәктәрҙән мәғлүмәт йыйып бөткәндән һуң ошо көндәрҙә иғлан ителәсәк. Яҡынса тауыш биреү һөҙөмтәләре менән проект сайтында танышырға мөмкин.

Акцияны ойоштороусылар - РФ Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы һәм "Тәбиғәт" Тирә-яҡ мөхитте һаҡлауға булышлыҡ итеү фонды мәғлүмәттәренә ярашлы, "Рәсәй аллеяһы" акцияһын ойоштороу Бөйөк Ватан Һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығын байрам итеүгә арналған саралар иҫәбенә инде. Үҫемлек-символдарҙы тантаналы рәүештә 2015 йылдың майында Севастополдең Еңеү Паркында ултыртыу күҙалланған. Ҡырым Республикаһының тәбиғи-мәҙәни паркында илдең бөтә 85 төбәгендә үҫкән үҫемлектәр һәм ағастар урын аласаҡ. Рәсәйҙең бөтә климат ҡитғаларын сағылдырасаҡ үҙенсәлекле тәбиғи баҡса ойоштороу көтөлә.

**Гөлфиә АКУЛОВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2015 йылдың июлендә Өфөлә уҙасаҡ ШОС һәм БРИКС саммиттарында ирекмән булырға һәм һәм унда ҡатнашырға теләүселәрҙән ғаризалар ҡабул итеү тамамланды. Ойоштороусылар 9500-ҙән ашыу анкета ҡабул иткән. Уларҙың күбеһе - Өфө юғары уҡыу йорттары студенттарынан. Ирекмәндәр ағымдағы йылдың ноябренән алып 2015 йылдың майына тиклем уҡытыласаҡ. Саммиттарҙа йәмғеһе 500 ирекмән эшләйәсәк.

✓"Эксперт" күсемһеҙ милек агентлыҡтары селтәре аналитиктары Өфөлә яңы төҙөлөүсе торлаҡ баҙарында хаҡтарҙың түбәнәйеүен теркәгән. Сентябрҙә Өфөнөң яңы төҙөлгән йорттарында квадрат метрҙың уртаса хаҡы 58,9 мең һум тәшкил итһә, ноябрь башына ул 56,1 меңгә тиклем төшкән. Күбеһенсә бер бүлмәле фатирҙар ҙур һорау менән файҙаланыла. Уларҙың хаҡы сентябрҙән 2,5 процентҡа кәмегән. Ике бүлмәле фатирҙар ошо уҡ осорҙа 3 процентҡа, өс бүлмәлеләр 5 процентҡа осһоҙайған.

✓"ТРТ-Аваз" Төркиә дәүләт телеканалы эфирында Башҡортостан тураһында фильм күрһәтелде. Уны Төркиә телеканалының видеотөркөмө быйыл 9-12 октябрҙә республикала булғанда төшөргән.

✓Республиканың суд приставтары-башҡарыусылары 12 мең 406 кешегә сит илгә сығыуҙы ваҡытлыса туҡтатҡан, шулар араһынан 4 мең 134 кешенең алимент буйынса ҙур күләмдә бурысы булған. Сит илгә сығыуҙы сикләү бурысты ҡайтарыуҙың законлы һәм мөһим сараһы булып тора.

✓Ишембайҙа үткән республика "Йәш ғаилә - 2014" конкурсында 8 ғаилә ҡатнашты. Өфөнөң Киров районынан Юриндар ғаиләһе - гран-приға, Әбйәлил районынан Хәлиловтар ғаиләһе - беренсе урынға, Өфөнөң Совет районынан Шакировтар - икенсе, Ишембайҙан Ғилмановтар ғаиләһе өсөнсө урынға лайыҡ булды.

✓Өфөлә 1 октябрҙән 1 ноябргә тиклем ҡатын-ҡыҙҙарҙа түш яман шешен асыҡлау буйынса айлыҡ үтте. Ул осорҙа барлығы 5242 ҡатын-ҡыҙ тикшереүҙәр үтте. Тикшереүҙәр барышында 37 ҡатын-ҡыҙҙа түш яман шеше булыуы асыҡланды, 74 ҡатын-ҡыҙ өҫтәмә тикшереүҙәргә ебәрелде, 440 өфөлөлә - мастопатия, 159-ында яман булмаған шеш асыҡланды.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Ер мәсьәләһе башҡорт өсөн ғүмер-ғүмергә иң көнүҙәк булып торған һәм тора. Был хаҡта оҙон-оҙаҡ һүҙ сурытмай, халҡыбыҙҙың гимны дәрәжәһенә күтәрелгән "Урал" йырындағы:
"Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын", -
тигән юлдарҙы ғына килтереү ҙә етә. Был һүҙҙәр милләттәштәребеҙ өсөн оран да, аманат та, васыят та булып яңғырай. Сөнки ер һәм уға бәйле мәсьәләләр һәр дайым тыуып, ҡабатлана. Бөгөн дә ер, уны һаҡлау - иң сетерекле проблемаларҙың береһе. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ауыл хужалығы ерҙәрен файҙаланыу буйынса ойоштороған эш кәңәшмәһе һәм ундағы сығыштар быны тағы бер раҫланы. Уларҙың барыһына ла туҡталып тормайынса, Башҡортостан Республикаһы Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министрлығының сектор мөдире Алексей ГНЕЗДИНдың сығышына иғтибар йүнәлткe килә.**

# ЕРҘӘН ЯҘҺАҢ - ШУЛ ЯМАН,

## йәки Тағы ла пай ерҙәре тураһында



- Ер ҡануниәтендәге үҙгәрештәр, нигеҙҙә, төрлө категориялағы, шул иҫәптән ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе халыҡҡа биреү процедураһына ҡағыла. Әлегә ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе юғалтыу тураһында һүҙ алып барырға иртәрәк, сөнки беҙҙә элекке норматив-хоҡуҡи акттар ғәмәлдә һәм улар ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе икенсе категорияға күсереүгә рөхсәт итмәй. Ә инде Рәсәй Федерацияһының Иҡтисади үҫеш министрлығы тәҡдим иткән территориаль зоналарҙы индереү системаһы кире ҡағылып, РФ Хөкүмәтендә Рәсәйҙең ер тураһындағы ҡануниәтенә үҙгәрештәр индереү маҡсатка ярашлы түгел, тигән һығымта яһалған.

Башҡортостан Республикаһында ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәргә килгәндә, ауыл халҡы, пайсылар үҙҙәренә милексе йөкләмәһен алырға әҙер булмай сыҡты. Ә нимә ул милексе йөкләмәһе? Ул ер участкаһы хужаһы статусына эйә булыусыларға билдәле бер яуаплылыҡ һала. Йәғни ергә хужа булаһың икән, һалым ҡануниәтенә ярашлы, ер өсөн, ерҙе ҡуртымға биргән осраҡта килем һалымы түләргә кәрәк. Ер теркәлмәгән икән, унан халыҡ үҙенә тейеш өлөштө ғына түгел, урындағы бюджет та килем алмай. Ғөмүмән, пай ерҙәре менән ниндәйҙер алыш-биреш, шул уҡ ҡуртым килешеүе төҙөү өсөн дә ергә милек таныҡлығы булыуы шарт. Әгәр ҡуртым килешеүе дәүләт теркәүенән тыш үткәрелә икән, уның юридик көсө булмаясаҡ.

Бөгөн бары тик Саҡмағош һәм Благовещен райондарында ғына ерҙәр тулыһынса милекселәр ҡулында. Башҡа райондарҙа һәр дөйөм пай майҙанында хужаһыҙ участкалар бар. Шуға күрә, ауыл биләмәләре уларҙы суд аша үҙҙәренең милкенә алырға тейеш. Йәғни бында ике хужа барлыҡҡа килә - айырым кеше һәм кешеләр алырға теләмәгән ерҙәрҙе алыусы ауыл биләмәһе.

Әлеге ваҡытка 15 процент халыҡ үҙенең ергә хоҡуғын теркәмәгән. Йәғни 55 мең кеше таныҡлыҡ алмаған һәм үҙенең пай ерҙәре менән ҡулланыу хоҡуғына эйә түгел. Ауыл Советтары, муниципаль берәмектәр тарафынан уларҙың ерҙәрен муниципаль милеккә алыу процедураһы ла бик аҡрын бара. Бөгөнгә ни бары шундай 8 мең гектар ер генә муниципаль судтар тарафынан муниципаль милеккә алынған. Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк: милексе ерен хосусилаштырмаған осраҡта ла, уны муниципаль ерҙәр иҫәбенә күсереү өсөн суд ҡарары булырға тейеш.

Был мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә район хакимиәттәре башлыҡтары яуаплы, әммә Ер кодексына ярашлы, ауыл хакимиәттәре башлыҡтарының вәкәләттәре һәм бурыстары тағы ла ҙурырак. Мәғлүм булыуынса, бөгөн республикала 818 ауыл иҫәпләнә. Һәм ошо ауыл муниципаль биләмәләре башлыҡтары дөйөм йыйылыш үткәреүҙән алып, пай ерҙәрен кемгә ҡуртымға биреү тураһында бер фекергә килеп, ошо йыйылыш ҡарары менән раҫлауға тиклем барлыҡ эштәрҙе башҡарып, дөйөм милек өлөшсөләре менән ауыл хужалығы тауары етештереүсе араһындағы мөнәсәбәттәрҙе көйләргә бурыслы.

Халыҡ ҡуртымға биргән ерҙәренә аҙ хаҡ йәки аҙыклата аҙ күләмдә түләү алыу проблемаһы бар. Әммә бынан да аяныслырағы - улар үҙҙәренең пай ерҙәрен һуҡыр тингә һатырға ла әҙер. Риэлторҙар, аралашсылар килеп, ауыл хужалығы предприятиеһы исеменән документтар төҙөп, кемдең ергә милек хоҡуғын раҫлаусы документы бар, шуларҙы алыш-бирешкә мәжбүр итәләр. Закон буйынса, ер пайын башҡа милек өлөшсөләренең ризалығынан тыш һатыу тыйыла. Әгәр дөйөм милектә пайы булыусы кемдер һатыуға ҡаршы була икән, тимәк, башҡалар ҙа пайҙарын һата алмай. Шуға ҡарамаҫтан, ер һатыу процесын туҡтатыу, үкенескә күрә, мөмкин түгел. Был ҙур ҡалаларға ла, ауылдарға ла ҡағыла. Әммә, мәҫәлән, Аҫҡын районы менән Өфө районын сағыштырып булмай. Өфө районында кешеләр ер участкаларын миллион һумға һатырға тырыша, Стәрлетамаҡ районында бер пай участкаһын 10 - 30 меңгә һаталар. Шуға күрә, халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барырға кәрәк.

Тағы шундай проблема ҡуҙәтелә: пай участкаларын халыҡ йәшәгән урындарға яҡын итеп бүлеүгә юл ҡуймау тураһында махсус күрһәтмә булһа ла, быға берәү ҙә ҡолаҡ һалмаған һәм бөгөнгә күпселек пай ерҙәре ауылдарға, ҡалаларға сиктәш булып килеп сыға. Һәҙәмтәлә, теләйбеҙме, юҡмы, халыҡ йәшәгән биләмәләр ауыл хужалығы ерҙәре иҫәбенә киңәйә. Ҡала төҙөлөшө кодексы ҡабул ителеү менән, был ауыл хужалығы ерҙәре категорияһындағы ерҙәр сик категорияһындағы ерҙәргә инәсәк. Әммә бөгөн айырым райондарҙа, ерҙәр икенсе категорияға күсмәҫ элек үк, уларҙа шәхси, күп фатирлы йорттар төҙәлә.

Быйыл августа республикала ауыл хужалығы ерҙәрен рациональ һәм һөҙөмтәле файҙаланыу буйынса хөкүмәт-ара комиссия төҙөлдө. Уға Хөкүмәт аппаратынан, ҡыҙыҡһыныусы министрлыҡтарҙан, башҡарма властың федераль органдарынан - Росреестрҙан, Росмилектән вәкилдәр инде. Тикшереүҙе беренселәрҙән булып ергә милек хоҡуғын ала башлаған Стәрлетамаҡ районынан башланыҡ. Ундағы хәл-торошто шулай баһаларға мөмкин: бөгөн бында ауыл хужалығы ерҙәрен файҙаланыу буйынса иң артҡы позицияла торалар. Дөйөм майҙандың 30 процентына милек хоҡуғы теркәлмәгән. Бер генә ауыл биләмәһе башлығы ла файҙаланылмаған ерҙәрҙе муниципаль милеккә күсереү инициативаһы менән сыҡмаған. Артабан комиссия республиканың 5-6 зонаһында тағы ла тикшереүҙәр уҙғарырға инәтләй.

Беҙгә Дәүләт ер комитеты эшен ҡабаттан тегеҙеү йәки уны Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министрлығының бер бүлеге итеп ойоштороу кәрәк. Ул бары тик ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр мәсьәләһе буйынса ғына шөғөлләнергә тейеш. Ул ваҡытта был структура подразделениеһы республикала ғына түгел, федераль структураларҙың да, шул иҫәптән Росреестр, Россельхознадзорҙың да эшен координациялар ине. Сөнки был органдарҙың ҡулы федераль закон менән "бәйләнгән", һәм улар ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе өс йылға бер тапҡыр, планға ярашлы ғына тикшерә ала (мәғлүм булыуынса, бөгөн күп ауыл хужалығы продукцияһын етештереүсе яуаплылығы сикләнгән ширкәттәр, Ауыл хужалығы продукцияһы етештереү кооперативтары, крәҫтиән-фермер хужалыҡтары ер ала, әммә уларҙы өс йылһыҙ тикшереү ярамай. Өс йыл үтеүгә, улар эшмәкәрлеген туҡтата йәки икенсе атама аҫтында теркәлә. Һәм шулай сикһеҙ дауам итә. Ошо арауыҡта улар ер менән файҙаланып, уның ундырышлылығын түбәнәйтә һәм өс йылдан һуң икенсе урындан ер ала). Әлегә илдең бер генә төбәгендә лә милек менән идара итеү комитеттары юҡ, беҙҙә улар хатта райондарҙа ла бар. Ышаныс ҡағыҙы буйынса ла, килешеү буйынса ла улар ерҙәр менән идара итеү, ҡарар сығарыу һәм килешеүҙәр төҙөү вәкәләтенә эйә. Шуға күрә, уларҙың вәкәләттәрен дә файҙаланырға кәрәк.

Зоналарҙа, әлбиттә, 5-6 районға бер инспектор бар. Был бик аҙ. Шуға ла ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙең нисек файҙаланылыуын тикшереү мөмкин түгел. Бының өсөн дәүләт ер надзоры субъекттарға кире ҡайтарырға кәрәк. Башҡортостан, шул иҫәптән муниципаль, милектә булған ерҙәр урындағы дәүләт органдары тарафынан тикшерелергә тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ерҙе пайҙарға бүлеү ҡасандыр бирелгән хосусилаштырыу чектары яҙмышына дусар булды: һәр кем үҙенә тейеш ере бар икәнлеген белә, әммә артабан нимә эшләтергә икәнен генә белмәй ҙә, йүнләп аңлатыусы ла юҡ. Чектарҙы ла бит күптәр бер файҙаһыҙ ҡағыҙ киҫәге, тип, кемеһе кейем-һалымға, бәгзеләр бер ярты араҡыға алмаштырҙы. Бөгөн пайҙар менән килеп тыуған хәл-торош та шул ситуацияны хәтерләтә. Өҫтәүенә, хәҙер пай ерең бар һәм ул милек булараҡ теркәлгән икән, уның өсөн йыл һайын һалым түләргә, әгәр уны ҡуртымға бирәһең икән, килем өсөн һалым түләргә кәрәк. Был, әлбиттә, былай ҙа йүнләп аҡса күрмәгән ауыл халҡы өсөн еңел мәсьәлә булмаясаҡ. Әммә, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Хәләф Ишморатов билдәләүенсә, бер гектар ерҙең хаҡы бөгөн 5 - 10 мең доллар торһа, уның кадастр хаҡы 500 мең долларға барып етеүе мөмкин. Тик мәсьәлә бында ерҙе һатыу тураһында түгел, ә нисек унан файҙа алыу хаҡында. Эш кәңәшмәһенең артабанғы йүнәлеше һәм маҡсаты тап ошо булырға тейеш тә инде.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үгәй инә үләне

❖ Тирелә төрлө аллергия арҡаһында төрлө бетсәләр, йыйырсыҡтар сыҡҡанда, ваҡлап туралған 1 стакан үгәй инә япрағын һәм сәскәһен ҡайнап торған ярты литр һыуҙа 15 минут ҡайнатырға. Һыуынғас, һөҙөргә, бетсәләр булған урыны йыуырға һәм төнәтмәне мамыҡ тампон менән һөртөргә.

### Нервылар ҡуҙғыһа

❖ Розмарин, йүкә сәскәһе, әрем үләндәрен бергә ҡушып (1 кг кәрәк), ваннаға һалырға һәм аҙнаға бер тапҡыр 20-30 минут ултырырға.

### Ярһып китеүҙән

❖ Кеше тиҙ ярһып китһә, бәйләнсек, ирешеүсән булһа, нервылы ҡаҡшаған була. Шул саҡта 100 грамм татлы тамырҙы (солодка), 50 грамм ҡарама агасының ҡайырыһын, 50 грамм миләүшә тамырын алып, ҡайнатып эсергә. Шифаһы бик тә тейә.

### Баланың тәне сабыртһа

❖ Бала тирләһә, уның тәненә ваҡ бетсәләр сығыусан. Шул мәлдә 1 стакан һыуға 1 балғалаҡ аш содаһы һалынған төнәтмәлә сылатылған мамыҡ тампон менән бетсәле урындарҙы һөртөргә.

### Клеверлы сәй

❖ Һары мәтрүшкә, ҡарағат япрағын бүлмә температураһында киптерәһең һәм шуны бер өлөш, клевер сәскәһен ике өлөш алып, бергә болғап, сәй кеүек бешереп эсәһен. Һыуыҡ тейгәндә, аҙ ҡанлылыҡ булғанда, ябыҡҡанда, үксәләр ауыртҡанда бик файҙалы дауа.

### Хәлһеҙлектән

❖ 200 грамм какао, малдың эс майы (нутряное масло), бал һәм аҡ майҙы талғын ғына утта болғай-болғай иретәһен, тик ҡайнап китмәһен. Әҙер ҡатнашманы быяла һауытта ҡараңғы, һалҡынса урында һаҡларға. 1 стакан һөткә 1 ҡалаҡ ошо ҡатнашманы иретеп ҡушып, көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Ҡыҙым әхирәте менән Баймаҡ районына ҡунаҡҡа барып ҡайтты ла: "Әсәй, башҡорт теле, башҡорт һөйләше шундай гүзәл, шишмә сылтырап аҡҡандай. Ә ниңә мине саф башҡортса һөйләшергә өйрәтмәнең?" - тип һораны.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ЕРҘӘН - ЕРӘН АЙҒЫР...

## Күктән күк айғыр бир

**Ат менән күк араһындағы бәйләнеш йомаҡтарҙа, йолаларҙа ла сағылыш тапҡан. "Күк яланда тай эҙе, ярылып ята үҙе", "Тигеҙ ерҙә тай эҙе" тигән йомаҡта тай - айҙы; "Һарайҙағы һары айғырым, һағынғанда кешнәйҙер" тигәндә һары айғыр - йәшенде; "Унда сабыр, бында сабыр ҡара атым, тау башынан дыулап барыр ҡара атым" тигәндә ҡара ат ямғыр болотон һынландыра.**

Тәүге күк күкрәгәндә башҡорттар ҡороҡ, йүгән алып, күккә ҡарап, уларҙы баш осонда әйләндергәндәр һәм ергә һуҡҡандар. Йүгәнде шылтыратып, уның менән өйҙөң йәки тирмәнең мөйөштәренә һуғып, түбәндәсә һамаҡлайҙар:

*Йүгәнеңде шылтырат,*
*Ҡороғоңдо ҡылтырат,*
*Турат, Турат!*
йәки:
*Ерҙән ерән айғыр бир,*
*Күктән күк айғыр бир!*
*Ҡорайт! Ҡорайт! Ҡорайт!*

Йүгән шылтырауы өйҙө яуыз көстәрҙән, йәшендән һаҡлай, тигән ышаныу бар, һамаҡта Турат йәшенде белдерә. Ҡорайт шулай уҡ йәшен менән бәйле, дөрөҫөрәге, ул Йәшен аллаһы. Ул ерән һәм күк төҫтәге ҡолон бирә, тип ышанғандар. Башҡорт мифологияһында ерән ат Ер инәһе иҫәпләнә.

Атты йәшен, күк һыуҙары хакимы булараҡ ҡабул итеү инйәр-ҡатай, тамьян, ҡумырыҡ-табындарҙа көслө булған. Улар Белорет районы Муллаҡай-Төркмән ауылы эргәһендәге Ташҡолон йәки Ҡолоҡай таш тип йөрөтөлгән ташҡа ямғыр яуҙырырға йәки уны туҡтатырға йөрөгәндәр. Әгәр ҙә ташҡа сыбыҡ менән һуҡһаң, ямғыр башланырға, ә уның янында ҡорбан салып, өй һайын йөрөп йыйған май менән ташты майлаһаң, ямғыр туҡтарға тейеш булған. Был урындың Ташҡолон йәки Ҡолоҡай таш тип аталыуының да үҙ хикмәте бар. Тәүтормош кешеләре ташта әле йәшәп ятҡан кешеләрҙең, шулай уҡ мәрхүмдәрҙең йәндәре йыйылған, тип иҫәпләй. Бөтөн милләттәргә хас был ышаныу башҡорттарҙа ла булған. Аҡъял батырҙың ике йәненең береһе ағас тапсығында булып, ул уны ҡултығының аҫтында һаҡлап йөрөтә. Уны һыуға ташлағандан һуң, батыр тәрән йоҡоға тала, бары тик иптәштәре был тапсыҡты табып, ташҡа һалғас ҡына батырға йән инә.

Имселәр ташты инә ташына һәм ата ташына бүлеп йөрөткән. Әгәр ҙә берәйһе балаға уҙа алмаһа, уның эсен инә таш менән һыйпап: "Инә таш менән имләйем", - тигәндәр. Туй йолаһында ҡыҙ кейәүе йортона китер алдынан кендек инәһе, таш булып ҡал, тип, уны һандығына таш һалған. Был ташты йәш килен ғүмере буйы һаҡларға тейеш булған. Бөгөн был йоланы ҡыҙ иренең ғаиләһендә ғүмергә ҡалһын өсөн эшләнгән, тип аңлаталар. Таштың тап кендек инәһе тарафынан бирелеүендә, бәлки, тәрәнерәк сер йәшеренгәндер - ҡатын-ҡыҙға тәбиғәт тарафынан бала тыуҙырыу бурысы йөкмәтелгән. Шуға ла был ташты биреп, ҡыҙға бала табыу һәләте бирелгәндер.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ХЕҘМӘТ ҺАБАҒЫ*

**Бер ойошмала водитель менән урам һепереүсе хеҙмәттәрен бер юлы алып барған йәш егеткә бер ҡарт килә лә үҙенең дә ошо урында ҡасандыр урам һепереүсе булып эшләп алыуы тураһында һөйләй башлай: "Афарин, улым, бер юлы ике эште алып бараһың икән. Был урында эшләгән саҡта мин дә бер-нисә урында бил бөктөм. Әле хаҡлы ялда булһам да, шул тиҙлектә, шул күләмдә хеҙмәт итеүемде дауам итәм", - ти. Һүҙҙән-һүҙ ялғанып, әңгәмә темаһы аҡсаһыҙлыҡ, эшһеҙлек мәсьәләләренә ялғана. "Хаҡлы ялға сығалар ҙа, ғәҙәттә, тынысланалар, ултыраҡ йәшәү рәүешенә өҫтөнлөк бирәләр. Бының менән үҙҙәрен-үҙҙәре ауырыуға әйләндерәләр. Хәрәкәт итмәһә, кешенең быуындары ҡата бит", - тип тә өҫтәй ҡарт. Һүҙ аҙағында уҙаман үҙенең йылына ике тапҡыр сит илгә сәйәхәткә сығыуын да һөйләп ала. Егеттә "Пенсионер ҙа ошолай тырышып-тырмашып аҡса эшләргә ынтылған саҡта, мин кемдән кәм әле", тигән сәм уяна... Һәр кешенең тормошонда ошондай сәм уятырлыҡ, дәрт ҡуҙғытырлыҡ һөйләшеүҙәр булып тора инде ул. Күптәр уларҙан һуң үҙенең холҡон, ғәҙәттәрен үҙгәртергә кәрәклеген аңлай. Әммә бик һирәктәр генә донъяға яңыса ҡараш ташлап, яңыса йәшәй, эшләй башлауға өлгәшә. Беҙҙең бөгөнгө ҡунағыбыҙ - алдараҡ һүҙ барған егет, Баймаҡ районында тыуып, Өфө ҡалаһында эшләүсе 34 йәшлек Батыр ҺИҘИӘТУЛЛИН бик әүҙем тормош алып бара. Уны бик күптәргә өлгө итеп ҡуйырға булыр ине. Теге һөйләшеү уның тормошон нисегерәк үҙгәртеп ебәрҙе икән? Әйҙәгеҙ, үҙен тыңлайыҡ.**

# ТЕЛӘК БУЛҺА НИ...

## биш урында ла эшләргә була икән!

- Һөйгән йәрем менән өйләнешкәндән, ике балалы булғандан һуң, ҡала ситенән ер, төҙөлөш материалдары һатып алыу маҡсатында, кредит алғайныҡ. Биш кредиттың түләү ваҡыты аҙна һайын алмашлап килеп етеп тик тора: аҡсаң ғына булһын. Күренгән генә урынға кредит түләү графигын да элеп ҡуйҙыҡ. Ләкин кредит түләү кәрәклеген хәтерҙә тотоу ғына аҙ - аҡса табыуҙың төрлө юлдарын да эҙләргә кәрәк. Ошо турала уйланып, элекке эш урынымда (хәҙер икенсе ойошмала водитель булып эшләйем) урам һепереп йөрөгән саҡта Роберт ҡартты осраттым. Отставкалағы хәрби икән. Уның бик аҡыллы кәңәштәрен тыңлағандан һуң урамда осраған төрлө белдереүҙәрҙе уҡырға, үҙемә эш ҡараштырырға ғәҙәтләнеп алдым.

Бер көндө улымды балалар баҡсаһына алып китеп бара инем. Ҡараһам, йәш кенә тәрбиәсе ҡыҙҙар ихатала ҡар таҙартып йөрөй. Балалар баҡсаһы мөдиренә инеп, урам һепереүсе талап ителеүен белдем. Күп уйлап та тормай, үҙемдең ошо эштә эшләргә теләүемде белдерҙем. Апайҙың: "Төп эшең бар бит, өлгөрә алырһыңмы һуң?" - тип һорауына ыңғай яуап ҡайтарҙым: "Әгәр артыҡ ваҡланмаһағыҙ, өлгөрөрмөн", - тинем.

Иртән тороп, балалар баҡсаһы территорияһын таҙартам да, туғыҙҙа төп эшемә юлланам. Шулай итеп, төп эш хаҡыма 5 меңлек өҫтәмә лә барлыҡҡа килде. Ләкин был ғына аҙ ине. Күҙ һалыштырып йөрөй торғас, бер поликлиникаға, йәнә бер банкҡа урам һепереүселәр кәрәклеген белдем. Инеп, унда ла эшкә урынлаштым. Тағы 10 мең өҫтәлде. Бер мәл улым йөрөгән, мин урам һепереүсе булып эшләгән балалар баҡсаһынан шылтыраталар: ҡарауылсы эштән киткән, яңы ҡарауылсы талап ителә икән. Миңә: "Әллә үҙең эшләйһең дә ҡуяһыңмы?" - тиҙәр. Унышына ла күҙ йомоп ризалаштым. Өлгөрөргә теләһәң, барыбер өлгөрәһең икән ул: ғаиләгә лә, эшкә лә. Яйы сыҡҡанда таксист сүрәтендә 15-се маркалы ВАЗ автомобилем менән районға ла ҡайтып әйләнәм. Бына һиңә ун көндә тағы ун мең, тигән һүҙ.

Алланың биргәненә шөкөр, яңыраҡ өсөнсөгә балабыҙ - ҡыҙыбыҙ донъяға килде. Мин бер уллы, ике ҡыҙлы ишле ғаилә башлығына әйләндем. Был аҙымға бик уйлап, бик теләп тәүәкәлләнек. Хәҙер беҙҙең бурыс - балаларҙы аяҡҡа баҫтырыу. Өлкән улыбыҙ мәктәпкә барғансы кредиттарҙың бер-икәүһен "ябып" өлгөрөргә кәрәк, тип тырышып йөрөйөм әле. Йәй көнө, эш еңел саҡта, күберәк эшләп ҡалырға тырышам. Ҡыш етһә, бер-ике эште ҡалдырырға тура киләсәк. Бирешмәҫбеҙ. Һау булһаҡ, өс йылдан кредиттарымдың барыһын да ҡаплап бөтөрәсәкмен, тип ниәт итәм.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Батыр ағай үҙенең бөгөнгө йәшәү рәүешенән бик ҡәнәғәт. Эшләргә, ғаиләһенең нигеҙен нығытырға тырыша ул. Яҡын киләсәктәге хыялы - һатып алған ер биләмәһендә өй күтәреп ултыртыу. 34 йәшендә генә өс балаға ғүмер биргән, йүгереп йөрөп эшләгән замандашыбыҙ күптәргә, шул иҫәптән, ошо юлдарҙың авторына ла, ныҡ шәп өлгө булып тора. "Спиртлы эсемлектәр эсмәйем, тәмәке тартмайым бит, шул да айыҡ фекергә килергә ярҙам итә", - тип, һүҙен йомғаҡланы ағай.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ФЕКЕР ТӨЙӨНӨ*

# БАРЫҺЫ ЛА ЯБАЙ ҒЫНА...

**Эй, тормошобоҙҙо ҡатмарландырырға яратабыҙ инде беҙ. Ниндәйҙер проблема уйлап сығарабыҙ ҙа, уны героик рәүештә "еңеп" сыҡҡандан һуң, ҙур ҡәнәғәтләнеү кисергән булабыҙ. Асылда иһә, был проблеманы үҙебеҙгә үҙебеҙ булдырғаныбыҙҙы танығыбыҙ килмәй.**

Бер тапҡыр шулай дәрескә ҡаты ҡағыҙҙан йондоҙ трафареты яһап алып барырға кәрәк ине. Йондоҙҙо нисек итеп һыҙырға икәнен тәүҙә черчение дәресендә, һуңыраҡ һыҙма геометрия фәнендә өйрәнгәйнем. Циркуль менән үҙеңә кәрәкле ҙурлыҡта түңәрәк һыҙаһың. Ул түңәрәктең радиусын теп-теүәл икегә бүләһең, табылған нөктәгә циркулдең грифелһеҙ осон ҡаҙайһың һәм ул радиустың яртыһынан... Ошо урынға еткәс, йәйәне ҡайҙа һыҙырға кәрәклеген онотҡанмын. Күпме тырышһам да, иҫемә төшөрә алмайым. Шул саҡ күршелә йәшәүсе Илфир иҫемә төштө. Әсәһе улы тураһында, һәйбәт уҡый, аҡыллы малай, тип тә маҡтанғайны шикелле. Индем дә: "Илфир, һеҙ мәктәптә черчение дәресе үтәһегеҙме?" - тип һорайым.

- Юҡ, киләһе йыл үтәсәкбеҙ, - булды яуап.

- Йәл, әтеү мин түңәрәкте теп-теүәл бишкә бүлә алмайым, онотҡанмын.

- Апай, бөтәһе лә ябай ғына бит. Түңәрәк - ул 360 градус. Ошо һанды бишкә бүлһәк, килеп сыҡҡан һан түңәрәктең биштән бер өлөшө булыр. Транспортир менән үлсәп һыҙырһығыҙ, - "Бер алманы бишкә бүләйек", тип йырлап та ҡуйған булды шаян малай. Йөҙөм ҡыҙарып, рәхмәт, рәхмәт, тип сығып китә һалдым...

Ысынлап та, ябай юлдар булғанда, ниңәлер ҡатмарлы ысулдар уйлап баш ватабыҙ, еңел генә итеп йәшәй ҙә белмәйбеҙ. Бына бит, "Балаларығыҙҙы башҡортса һөйләшергә өйрәтегеҙ", тигән саҡырыуҙы гәзит-журналдарҙың һәр һанында уҡыйбыҙ. Улар минең уңалмаҫ ярама тоҙ һипкән кеүек. Ирем - Илеш башҡорто, мин - Бөрйәндәнмен. Шуға ла миңә, "сей" башҡортҡа, Илеш башҡортоноң теле башҡорт теленән айырылған кеүек тойола ла тора. Башҡорт теленең һөйләштәре төрлө икәнен йәшлегебеҙгә барып, аңлай алмағанбыҙ: минең һөйләгәнем иремдең ҡолағын яра, ә уның һөйләше миңә оҡшап етмәй. Йөҙҙәребеҙ һытылып, әрләштек-әрләштек тә, ғаиләбеҙҙә русса ғына һөйләшергә булдыҡ. Ҡыҙыбыҙ русса һөйләшеп үҫте, шулай ҙа эшебеҙ буйынса командировкаларҙа йыш йөрөүебеҙ сәбәпле, Илештәге өләсәйендә, ундағы балалар менән уйнап үҫеп, шул яҡтарҙың татарсаға тартым башҡорт диалектында һөйләшергә өйрәнеп алды. Саҡ ҡына үҫкәс, ҡыҙым әхирәте менән Баймаҡ районына ҡунаҡҡа барып ҡайтты ла: "Әсәй, башҡорт теле, башҡорт һөйләше шундай гүзәл, шишмә сылтырап аҡҡандай, йә еләҫ ел иҫкәндәй тойола. Ә ниңә мине саф башҡортса һөйләшергә өйрәтмәнең?" - тип һораны. Аҡланып, ғаиләләге ҡатмарлы мөнәсәбәттәрҙе һөйләп тороп булмай бит...

Бөгөн иһә башҡаларҙың минең хатамды ҡабатлауын күреп, күңел һыҡрай. Күрше малайы Илфир әйткәнсә, бөтәһе лә ябай ғына ла бит! Һәр балалар баҡсаһында башҡорт төркөмө булдыра алабыҙ түгелме һуң? Мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәрен ҡыҫҡартҡас, әллә күпме башҡорт теле уҡытыусыһы эшһеҙ ҡалған, тип уҡығайным. Уҡытыусыларҙың эш хаҡын һаҡлап ҡалып, балалар баҡсаһына эшкә урынлаштырып булмай инеме икән? Теләһәләр, бүтән милләт балалары ла башҡорт төркөмөнә йөрөр ине. Ике тел белеп үҫеүҙең бер зыяны ла юҡ бит. Балалар баҡсаларында башҡорт төркөмө асыу ҙа тормошҡа ашмаҫ хыял ғына булып ҡалырмы икән?

**Айгөл АХУНОВА.**

СЫҒАНАҠТАР НИ ҺӨЙЛӘЙ?

# "АЗИЯЛАҒЫ МӘҘӘНИӘТЛЕ ХАЛЫҠТАР"

## Немец ғалимы Ратцель башҡорттар тураһында


Народовѣдѣніе.
Проф. д-ра Фридриха Ратцеля.

**XIX быуатта Көнбайыш Европала, бигерәк тә Германияла, Францияла һәм Англияла география, этнография фәндәре ҙур үҫеш ала. Был фәндәрҙә төрлө яңы теориялар барлыҡҡа килә башлай. Шуларҙың береһе - антропогеография (грек тел. anthropos - кеше һәм география). Антропогеографияның төп маҡсаты - кеше менән тирә-яҡ мөхит араһындағы бәйләнеште өйрәнеү.**

Антропогеография мәктәбенә нигеҙ һалыусы немец ғалимы Фридрих Ратцель була. Фридрих Ратцель (1844-1904) - немец географы, этнографы, социологы, Мюнхен, Лейпциг университеттары профессоры. Үҙенең хеҙмәттәрендә кеше һәм географик мөхит араһындағы мөнәсәбәттәрҙе тикшерә. Ул Ер шарында кешеләрҙең урынлашыуын һәм уларҙың мәҙәни үҫеш кимәлен географик шарттар менән бәйләй. Фридрих Ратцель фекерләүенсә, халыҡтар (этностар) үҙгәрә, юҡҡа сыға, әммә уларҙың матди мәҙәниәт байлығы тороп ҡала. Шуға күрә лә был предметтарҙың ер өҫтөндә таралыуын өйрәнеү - мөһим мәсьәлә. Ратцель матди мәҙәниәт предметтары элементтарының ике төрлө күсеү юлын билдәләй: 1) бөтә культура комплексының тулыһынса һәм тиҙ күсеүе; 2) айырым матди мәҙәниәт предметтарының бер халыҡтан икенсе халыҡҡа күсеүе.

Үҙенең төп уйҙарын, ҡараштарын Фридрих Ратцель күп томлы "Антропогеография" (1882), "Народоведение" (1885), "Земля и жизнь" (1891) китаптарында һүрәтләй. Ғалимдың һуңғы ике китабы Рәсәйҙә рус телендә баҫылып сыға, бигерәк тә "Народоведение" хеҙмәте популярлыҡ яулай һәм уны өс тапҡыр нәшер итәләр.

Ф. Ратцелдең "Народоведение" әҫәре ике томдан тороп, беренсеһендә Океания, Австралия, Америка, көньяҡ һәм эске Африка ҡәбиләләре, халыҡтары ҡарала. Башҡорт халҡы тураһында мәғлүмәтте китаптың икенсе томында табырға була. Унда башҡорттар тураһындағы белешмә "Азиялағы мәҙәниәтле халыҡтар" бүлегендә бирелә. Ратцель башҡорттарҙы шулай тасуирлай: "Европа сигендә урынлашҡан халыҡтар араһында башҡорттар йәшәй. ... Ибн-Фаҙлан яҙмаларынан күренеүенсә, уларҙың 925 йылда уҡ (дөрөҫө 921-922 й. - **А.П.**) Волга йылғаһынан көнсығышҡа табан далаларҙа йәшәүе билдәле". Артабан автор башҡорттарҙы төркиләшкән, Ислам динен ҡабул иткән халыҡ тип күрһәтә. Башҡорт казак ғәскәре рус армияһы составына ингән, тип әйтеп үтә.

Ф. Ратцель яҙыуынса, башҡорттарҙың һаны 775 000 кеше тирәһе, улар Көньяҡ Урал далаларында һәм унан көнсығышта инде мең йыл йәшәй. Ул "...башҡорттар хәҙерге ваҡытта ғына күсмә тормоштан ултыраҡ тормошҡа күсә башлаған", тип яҙа. Ратцель үҙенең китабында Лейпциг халыҡтар музейында һаҡланған башҡорт йәйәләренең һәм уҡтарының һүрәтен килтерә. Уның уйлауынса, ул ҡоралдар 1813 йылғы Лейпциг эргәһендәге Наполеон ғәскәрҙәренә ҡаршы "Халыҡтар һуғышынан" тороп ҡалған булырға тейеш.

**Айбулат ПСӘНЧИН,**
**география фәндәре докторы, профессор.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Фридрих Ратцелдең "Народоведение" хеҙмәтендәге башҡорттар тураһындағы мәғлүмәт ҙур һәм бай булмаһа ла, был китап беҙгә XIX быуат аҙағында Көнбайыш Европала башҡорт халҡын нисек ҡабул итеүҙәрен күрһәтеүе менән әһәмиәтле.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ




# ТАРИХТЫ БОҘАЛАР...

## Ә беҙ өндәшмәйбеҙ

**Беҙ күп милләтле илдә һәм республикала йәшәйбеҙ. Башҡортостан Республикаһында аҫаба башҡорттар һәм йөҙләп милләт вәкилдәре татыу донъя көтә, республика сәйәси яҡтан Рәсәй Федерацияһында иң тотороҡло субъекттарҙан һанала. Киләсәктә лә ошо тотороҡлоҡто һаҡлап ҡалырға ине.**

Үкенескә күрә, һуңғы ваҡытта Башҡортостан менән бәйле тарихи фактарҙың боҙоп күрһәтелеүе күҙәтелә. Был боҙоуҙар урындағы баҫмаларҙа ла, рәсми сайттарҙа ла, радио һәм телевидениела ла урын ала. Был йәһәттән бигерәк тә "Аргументы и факты" гәзитенең республикала сыҡҡан ҡушымтаһы айырылып тора. Унда баҫылған мәҡәләләр халҡыбыҙ тарихына, шәхестәренә ҡарата ниндәйҙер нәфрәт менән һуғарылған кеүек хатта.

Башҡа сығанаҡтарҙа ла авторҙарҙың ниндәйҙер яңылыш мәғлүмәтте эләктереп алып, башҡорт тарихы тураһында юҡ-барҙы һөйләүе бик тә күңелде ҡыра. Мәҫәлән, бер ваҡыт: "Здесь спокойно кочевали башкирские племена, оседло проживали татары, тептяри, мордва", - тигән мәғлүмәтте уҡып, шаҡ ҡаткайным. Ысынында, бындай хаталар халҡыбыҙҙың тарихын белмәүҙән килә. Быға үҙебеҙ ҙә ғәйепле, әлбиттә, киң мәғлүмәт сараларында сыҡҡан хаталы сығыштарҙы тиҙ генә төҙәтеү сараһын күрмәйбеҙ. Шул уҡ "Аргументы и факты" гәзите ҡушымтаһында баҫылған мәҡәләләргә ҡарата ла үҙ фекерен белдергән сығыштарҙы уҡыған юҡ. Гәзит бит үҙендә сыҡҡан материалдарға шаңдауҙарҙы, ҡапма-ҡаршы фекерҙәрҙе баҫырға шулай уҡ бурыслы.

Тарихсы, крайҙы өйрәнеүсе Ҡорбанғолов үҙенең "Благовар районы ауылдары тарихы" китабында ошо хаҡта ла яҙып үтә: "Аҫаба халыҡ башҡорттарҙан тыш, Благовар районында урыҫтар, татарҙар, сыуаштар, мариҙар, мордвалар, украиндар, белорустар, поляктар һәм башҡа милләт вәкилдәре йәшәй. Уларҙың был ерҙәргә ҡасан күсеп килеүен дөрөҫ итеп билдәләйһе бар әле. Сөнки һуңғы йылдарҙа айырым кешеләрҙең сығыштарында, урындағы матбуғат биттәрендә дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр күренә башланы. Мәҫәлән, район хакимиәте вәкилдәре ҡатнашлығында үткән бер семинарҙа телмәр тотоусыларҙың береһе: "Бында башҡорт ҡәбиәләләренән меңдәр, крәшендәр, ҡаңлылар күсмә тормош алып барған, татарҙар, типтәрҙәр, мордвалар ултыраҡ тормошта көн иткән", - тип әйтеп ысҡындырҙы. Һуңынан ошо һүҙҙәр семинарҙа ҡатнашыусы кешеләр тарафынан эләнеп алып, башҡа сығыштарҙа ла ҡабатланды, урындағы матбуғатта баҫылып сыҡты. Тәү ҡарауға күңелде ҡыра торған нәмә лә юҡ һымаҡ. Ләкин уның нигеҙендә тарихты боҙоп күрһәтеү апасыҡ ярылып ята. Тарихи сығанаҡтарға мөрәжәғәт итһәк, был яҡтарға типтәрҙәр, мишәрҙәҙең Ҡасим ханлығынан, Темниковск кенәзлегенән һәм Урта Иҙел, Кама буйы райондарынан XVIII быуаттың тәүге сирегендә генә күсенеп килеүен күрәбеҙ. Ә был ваҡытҡа инде башҡорттарҙың ултыраҡ тормош алып барыуын раҫлаған документтар бихисап. Шуларҙың береһен миҫал итеп килтермәксемен. 1675 йылда башҡорт ерҙәренә килгән сәйәхәтселәр үҙҙәренең юлъяҙмаларында: "Нуғай даруғаһындағы бөтөн башҡорттар ҙа ер һөрә һәм икмәк үҫтерә, ҡышлауҙарында үҙ йорт-һарайҙарын төҙөй", - тип яҙа (Башҡорт АССР тарихы буйынса материалдар). Документтарҙың дөйөм йөкмәткеһенән асыҡланыуынса, был хәбәр Мең һәм Бөрйән улыстары башҡорттарына ла ҡағыла..."

Китап авторы Ҡорбанғолов яҙғанса, башҡорттар менән мишәрҙәр 300 йыллап йәнәш йәшәй, һәм улар бер-береһе менән аралашып, яҡынайып бөткән. Шул арҡала башҡорттарҙың күпмелер өлөшө мишәрҙәрҙең мәҙәниәте һәм теле йоғонтоһона бирелгән. "Ләкин был фактарҙы киҫкенләштерергә, ниндәйҙер яуыз ниәттә файҙаланырға ярамай", - ти автор.

Минең өләсәйем дә мишәр милләтенән ине. Ул үлеп киткәнсе: "Беҙ татар түгел, Совет власына тиклем булған барлыҡ халыҡ һанын алыу документтарында ла ата-бабаларыбыҙ үҙҙәрен башҡорт тип яҙҙырған", - тип әйтә торғайны.

Ни әйтергә теләйем? Үҙебеҙҙең тарихыбыҙға ла, тарихты боҙоп күрһәтеүҙәргә лә битараф булмайыҡсы әле. Ә хаталар күҙебеҙгә салынһа, уларҙы төҙәтеү, үҙебеҙҙең фекеребеҙҙе белдереү өсөн йыбанмай ғына ҡулыбыҙға ҡағыҙ-ҡәләм алайыҡ.

**Айнур ИШЕМҒОЛОВ.**
**Салауат ҡалаһы.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Баланы биләүҙә тотоу оҙаҡ дауам итә, ҡайһы ваҡытта уны йәш ярымға тиклем биләйҙәр. Шул уҡ ваҡытҡаса имеҙәләр ҙә. Имеҙеү осоронда әсә баланан айырылмай, уны үҙе менән яланға эшкә лә, ҡунаҡҡа ла алып йөрөй. Әгәр әсәнең һөтө етмәһә, балаға бары тик туғыҙ-ун айлыҡ булғас ҡына өҫтәмә рәүештә һыйыр һөтөн бирә башлайҙар. Йәш ярым тирәһендә бала атлай башлай, ҡайһы берҙә уға атлаһын өсөн махсус ҡулайлама - аяҡ арбаһы эшләйҙәр (230-сы һүрәт). Дүрт-биш йәш тулғас, малайҙар күберәген аталары эргәһендә була, алтыете йәштә инде ул һыбай оҫта йөрөй, һигеҙ йәштә атаһына төрлө эштәрҙә ярҙам итә башлай. Ҡыҙҙар ҙа ошо йәштән әсәләренә хужалыҡ эштәрендә булыша.



XX быуат башында башҡорттарҙа ерләү йолаһы дөйөм мосолмандарҙыҡынан әллә ни айырылмай. Үлем алдында ятҡан кешенең хәле мөшкөлләнә башлау менән туғандарынан берәү йәки мәзин ясин сыға башлай, ә мулла аят уҡып, уның ауыҙына һыу һала (үлем түшәгендә ятыусы ныҡ һыуһай һәм ул бер сынаяҡ һыу өсөн шайтанға иманын һатырға ла мөмкин, тигән ышаныу йәшәгән мосолмандарҙа). Бәндә үлгәс, мулла уның күҙҙәрен йомдора һәм ауыҙын яба, аяҡ-ҡулдарын рәтләп, кәүҙәнең уң яғы Мәккәгә ҡарап торорлоҡ итеп һала. Һуңынан мулла ҡайтып китә, үлеүсе ир кеше булһа, мәзин менән башҡа ирҙәр мәйетте йыуып, кәфенгә урай. Мәйет йыуыусыға ниндәйҙер бүләк, бик йыш кеше үлгән ваҡытта кейгән кейемде бирәләр. Тау һәм Урал аръяғы башҡорттары мәйетте кесерткән туҡымаға, әгәр ул булмаһа, киндергә йәки миткалға төрә, әммә кесерткән ептәр менән тегә. Ир-атты өс ҡат кәфенгә урағандар, ә ҡатын-ҡыҙҙы - биш. Шәриғәт буйынса, үлгәндән алып күмгәнгә тиклем ваҡыт мәйет өсөн иң ауыр осор булғанлыҡтан, уны тиҙерәк ерләргә ашығалар. Әгәр ул иртән мәрхүм булһа, төштән һуң ерләйҙәр, ҡояш байыр алдынан үлеүсене икенсе көн ҡояш тыуғас ергә тапшыралар. Ерләнмәй төнгә ҡалған мәйет үлгән бинала ҡала. Мәйетте өйҙән алып сығып, ағас ҡайырыһы менән ҡапланған махсус тим ағасына һалалар һәм зыяратҡа алып баралар. Бындай носилка ике оҙон һайғауҙан һәм уға һалынған дүрт-биш арҡыры ағастан тора.

Күсмә башҡорттарҙың ерләү процессияһын И. И. Лепехин шулай һүрәтләй: "Алдан өс башҡорт балта һәм көрәк тотоп бара. Күрәһең, ҡәбер ҡаҙыусыларҙыр. Йөҙ, ике йөҙ сажин артта һыбай мулла килә, ә уның артынан мәйетте алып баралар. Ул ҡайыры өҫтөндә ята, уның өҫтөнә киндер ябылған. Ҡайыры оҙон һайғауға ике яҡтан бау менән эленгән һәм һайғау ике һыбайлының эйәренә нығытылып ҡуйылған. Арттараҡ мәрхүмде оҙатыусы туғандары барыһы ла һыбай бара. Шулай итеп, ауылдан ситтә йәйләүҙә булған башҡорттарҙа мәйетте һуңғы юлға оҙаталар".

Ҡатын-ҡыҙ мәрхүмде бары тик ҡапҡаға тиклем генә оҙата һәм ерләү процессияһында ҡатнашмай. Сөнки уларҙың зыяратта булыу, мосолман инаныуы буйынса, зыяраттың изгелеген боҙа. Мәйет оҙатыусы ир-ат иламай, шым ғына бара.

*✓ Ҡайһы берәүҙәр, аң-тоңон белештермәйенсә, теләһә ниндәй арзанлы ялтыр-йолтор менән биҙәп, боҙоп эшләй башланы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүестәрен. Шул сәбәпле, түҙмәй тотоноп киттем дә инде был шөғөлгә.*



**Халҡыбыҙҙың рухи хазинаһын түкмәй-сәсмәй, беҙгә ата-бабаларыбыҙ нисек килтереп еткергән, шул тулылығында киләһе быуындарға тапшырыу - изгеләрҙән-изге аманат ул. Көс һәм һәләтебеҙҙән килгәнсә ошо бурысты атҡарыу фарызлығы ғүмер дәфтәребеҙгә яҙып ҡуйылған. Тик берәүҙәрҙең был турала ике ятып бер төшөнә лә инмәһә, был бурысты атҡарыу икенселәрҙең тормош асылына, йәшәү мәғәнәһенә әйләнгән. Күрәһең, был вазифа ундайҙарға Юғары көс тарафынан тыумыштан биреләлер. Шулай булмаһа, улар дан өсөн дә, аҡса өсөн дә түгел, шәхси мәнфәғәттәре менән дә иҫәпләшеп тормай, халыҡ ижады хазиналарын халыҡҡа ҡайтарыу, йәш быуынға йолаларыбыҙҙы өйрәтеү эшенә йән атып тотонмаҫ ине. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - Сибай ҡалаһында йәшәүсе ҡарһүҙ һөйләүсе, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады белгесе, кейеҙ баҫыу, ҡорама ҡорау, башҡорт милли кейемдәре аксессуарҙары эшләү буйынса танылған оҫта Асия Солтан ҡыҙы ҒӘЙНУЛЛИНА тап ана шундай шәхестәребеҙҙең береһе лә инде. Ул ошо өлкәләге эш тәжрибәһе һәм, ғөмүмән, мәҙәниәт өлкәһендәге ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса үҙ фекерҙәре менән уртаҡлаша.**

# БАШҠОРТОМДОҢ РУХИ ХАЗИНАҺЫН...

## иңдәремә йөкмәп киләм



### Инеш башы - әсә телендә

Кешегә бөтөн нәмә әсә теле аша бирелә: аҡыл, тәүфиҡ, зиһен, аң-белем, талант... Миңә йыш ҡына, халыҡ ижадын ҡайҙан шулай яҡшы өйрәндең, уға ҡайҙа уҡыттылар, тигән һорау биреп аптыраталар. Әйткәндәй, халыҡ ижады белгесе, фольклорсы булырға бер ерҙә лә өйрәтмәйҙәр. Әсә теле аша ғаиләлә бирелә кешегә был аманат. Икенсенән, халыҡтың ауыҙ-тел ижады белгесе булыу - ул һөнәр түгел, ә күңел торошо, тип әйтер инем. Был ғилем миңә әсәйемдән һәм, ғөмүмән, нәҫелдән бирелгәндер, тием. Әсәйем уҡытыусы булды, гел миңә әкиәт һөйләр ҙә ҡысҡырып китап уҡыр йә ҡобайырҙар әйтер ине.

Атайымдың атаһының ут шикелле янып торған Бибикамал менән Ғилмиямал исемле ике һеңлеһе була: үҙҙәре үткер, төҫкә-башҡа ла матур булған улар. Ошо ике инәйем дә йәш саҡтарында йыйындарҙа ярышып ҡурай уйнаған. Бер-береһен еңә алмаһалар, әйтешкә күсеп китәләр ине, тип һөйләгәндәрен иҫләйем. Бәләкәйҙән хәтеремдә ҡалған бер күренеш: соланыбыҙҙа һәр ваҡыт таҡталар араһына кипterergә ҡыҫтырып ҡуйылған ҡурайҙар торор ине. Тыуған ауылым Вәҙәмдә лә, һуңыраҡ күсеп килгән Әбештә лә шулай булды. Әбештәге ете йыллыҡ мәктәп атайым менән әсәйем уҡытырға килгәс, ун йыллыҡ итеп үҙгәртелә. Балалар бөтә тирә-яҡ ауылдарҙан Әбешкә йөрөп уҡыйҙар ине. Биш йәшем тулмаҫ борон уҡырға өйрәндем. Мәһирә еңгәм ауыл китапханаһында эшләй ине. Аҡъярҙан Әбешкә күп итеп яңы китаптар килтереп ауҙаралар ҙа, еңгәм уларҙың һәр береһен иҫәпкә алып, теркәп, тәртипкә килтергәнсе, мин шул китаптарға күмелеп ултырып уҡый инем. Әсәйем менән атайым да берәй ҡайҙа китергә булһалар, бына һиңә китаптар, тип, мине китаптарға күмеп, өйҙә ҡалдырып китәләр. "Гел тәҙрә төбөндә китап уҡып ултыра торғайның", тип хәтерләй әле лә ауылдаш-тиңдәштәрем. Үҙем генә лә уҡып ултырмайым. Өй артыбыҙҙағы таҡта өҫтөнә тиҫтерҙәрем менән теҙелешеп ҡунаҡлайбыҙ ҙа, үҙҙәре уҡый белһә лә, улар минән ҡысҡыртып әкиәт уҡытырға яраталар ине. Йә һөйләтәләр. Бында инде минең өсөн фантазияға юл асыла. Аҙағы күңелһеҙ бөткән әкиәттәрҙе үҙемсә үҙгәртеп, яҡшыға бороп һөйләргә ярата инем. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙы "терелтәм": улар, йәнәһе, ҡош булып осоп китәләр ҙә яңынан килеп ҡауышалар, имеш...

### Бер селтәр танк хаҡына торошло булған, тиҙәр...

Ҡартәсәйем ҡул эштәре менән булышҡанда гел уның янында ярҙамлашып ултыра торғайным. Элек урындыҡҡа буй балаҫ түшәйҙәр ине. Ҡартәсәйем матур итеп ана шундай балаҫ һуға, ә мин уға буй-буй таҫмалап сепрәк ҡырҡам, еп тартышам. Ҡартәсәйем шулай уҡ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының боронғо биҙәүестәре - селтәр, һаҡал, түшелдерек кеүек аксессуарҙар оҫтаһы ла ине. Әле лә хәтерләйем: ҡайһы бер ауылдаш апайҙар һандыҡ төбөндә ҡомартҡы булып ятҡан, ләкин файҙаланырлыҡ хәлдә булмаған селтәр, ҡашмау, түшелдеректәрен ҡартәсәйемә килтереп, яңыртып эшләп биреүен үтенәләр ине. Ҡартәсәйем эшләй эшләүгә, ләкин уның был эште ҡурҡыбыраҡ, йәшереп эшләүе хәтеремдә ныҡ уйылып ҡалған. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында бит өй һайын тиерлек булған ошондай биҙәүестәр фронт өсөн йыйып оҙатылған. Өлкәндәрҙең, бер селтәр - бер танк хаҡы булды, тип һөйләгәндәре лә иҫтә. Күрәһең, ҡартәсәйемә ана шунан тороп ҡалған әйберҙәрен килтергәндәрҙер. Әйткәндәй, хәҙер башҡорт милли костюмдары биҙәүестәрен яһаусы оҫталар ҙа юҡ бит. Ә нисек кәрәк улар! Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр, аң-тоңон белештермәйенсә, теләһә ниндәй арзанлы ялтыр-йолтор менән биҙәп, боҙоп эшләй башланы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүестәрен. Шул сәбәпле, түҙмәй тотоноп киттем дә инде был шөғөлгә.

***Мин ойоштороп ебәргән "Ете ҡыҙ" этнография һәм матурлыҡ студияһында беҙ тап ана шундай боронғо кәсеп һәм ҡул эштәренә, матур итеп донъя көтөү, аш-һыу бешереү серҙәренә йәш ҡыҙҙарҙы өйрәтәбеҙ. Унда йөрөгән ҡыҙҙар ынйы-мәрйен, сәйләндән, аҫыл таштарҙан һәм тәңкәләрҙән селтәрҙе үҙҙәре яһап кейҙеләр. Был еңел генә эш түгел, ике йыл буйы баш баҫып ултырырға тура килде һылыуҡайҙарға. Бына шунда күренде лә инде ҡыҙҙарымдың сабырлығы, уңғанлығы, ысын матурлыҡҡа ынтылышы. Шуныһы ҡыуандырҙы: был шөғөл уларҙың үҙҙәрен генә ҡыҙыҡһындырған үҙмаҡсат булып ҡалманы, ғаиләләренең уртаҡ хәстәренә әйләнде: "Ҡайҙа, ҡыҙым, мин дә эшләп ҡарайым", - тип, әсәләре лә тотоноп китте был эшкә; тәңкә, көмбәҙ юллап, аталары ла йүгермәләп йөрөнө.***

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының боронғо баш кейеме булған ҡашмау, түшелдерек, йәғни селтәр (ҡайһы бер урындарҙа уны һаҡал тип тә әйтәләр), арҡыры яға һәм башҡа шундай биҙәүестәр ғаилә хәлен күрһәтеп тороусы эквивалент ҡына түгел, бәлки уны кейеп йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙы (бигерәк тә йәш әсәләр, киленкәләштәрҙе) яуыз ҡара көстәр-

ҙән аралаусы, күҙ тейеү һәм боҙомдан һаҡлаусы тылсым тип тә ҡаралған. Шуға ла элгәре улар тотошлай шау көмөш тәңкәләрҙән, ваҡ ҡына ҡыҙыл диңгеҙ мәрйендәренән, фирүзә, аҡыҡ, гранат кеүек аҫыл таштар менән биҙәлгән. Бөгөн көмөш тәңкәләр урынына тинлек аҡсалар файҙаланыла, шулай ҙа мөмкинлек булғанда, селтәр-ҡашмауҙы аҫыл таштар, көмөш тәңкәләр менән биҙәү фарыҙ. Әйткәндәй, 1962 йылға тиклемге 10 тинлектәрҙән көмбәҙ баҫып эшләргә була, ә бына унан һуңғы тинлектәрҙең сифаты түбән, уларҙан көмбәҙ сыҡмай. Ҡыҙыҡһынған кешеләр булһа, шуныһын да әйтәйем: Сибайҙа Латипов Рәил исемле уҙаман көмбәҙҙәр эшләү менән мауыға, берәүһен 100 тәңкәгә һатып алырға була. Ҡыҫҡаһы, материал табыу ҡыйын түгел, иң мөһиме - күңеле ятып, теләге булған кешегә йүне сығып тора.

Мин ойоштороп ебәргән "Ете ҡыҙ" этнография һәм матурлыҡ студияһында беҙ тап ана шундай боронғо кәсеп һәм ҡул эштәренә, матур итеп донъя көтөү, аш-һыу бешереү серҙәренә йәш ҡыҙҙарҙы өйрәтәбеҙ. Унда йөрөгән ҡыҙҙар ынйы-мәрйен, сәйләндән, аҫыл таштарҙан һәм тәңкәләрҙән селтәрҙе үҙҙәре яһап кейҙеләр. Был еңел генә эш түгел, ике йыл буйы баш баҫып ултырырға тура килде һылыуҡайҙарға. Бына шунда күренде лә инде ҡыҙҙарымдың сабырлығы, уңғанлығы, ысын матурлыҡҡа ынтылышы. Шуныһы ҡыуандырҙы: был шөғөл уларҙың үҙҙәрен генә ҡыҙыҡһындырған үҙмаҡсат булып ҡалманы, ғаиләләренең уртаҡ хәстәренә әйләнде: "Ҡайҙа, ҡыҙым, мин дә эшләп ҡарайым", - тип, әсәләре лә тотоноп китте был эшкә; тәңкә, көмбәҙ юллап, аталары ла йүгермәләп йөрөнө.

## Сәсәндәр мәктәбе беҙҙә тыуҙы

Халҡыбыҙҙың тәбиғәт көстәре менән ярашып, йыһан энергетикаһынан көс-ҡеүәт алып йәшәүе серҙәренең береһе уның ауыҙ-тел ижадында ярылып ята. Башҡа халыҡтарҙа булмаған ана шул уникаллек төрҙәрен һаҡлап алып ҡалырға, уны тәбиғи асылында нисек бар, шул килеш һаҡлап алып ҡалырға бурыслыбыҙ. Мин быға 2003 йылда ЮНЕСКО тарафынан Бүрәт илендә үткәрелгән "Донъя бишек йырҙары" конкурсынан һуң ныҡлап төшөндөм. Дөрөҫөн әйткәндә, шундай бай, ҡыҙыҡлы тема булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙә бишек йырҙары темаһы менән берәү ҙә шөғөлләнмәй. Ысынында "бишек йыры" тигән төшөнсә руссанан һүҙмә-һүҙ тәржемәнән килеп сыҡҡан, ә бит халҡыбыҙ улай тимәй, ә бала бәүетеү, көйләү, бала йоҡлатыу, ти.

Шулай бер саҡ поезда Өфөгә килә ятҡанда йәш кенә ҡатынҡайҙың бәпесе илай ҙа илай бит. Ҡулыма алып, "әүә-ә-әйй, әүә-ә-әйй, әүә-ә-әйй" тип көйләй башлауым булды, сабый тынысланып йоҡлап та китте. Ябай ғына өндәр һәм интонация түгел, тимәк, беҙҙең сәңгелдәк көйө. Уның беҙ аңлап бөтмәгән тылсымы бар. Әйткәндәй, минең әлеге конкурстағы сығышымдың яҙмаһынан Японияла диск сығарылған.

Былтыр Тывала өҙләү буйынса VI халыҡ-ара симпозиумда ла ҡатнашырға тура килде. Беҙҙә был сәнғәт төрө менән махсус шөғөлләнгән кеше юҡ тиерлек. Шуға, саҡыралар икән, шатланып барам, белгән һөнәремде күрһәтеп, Башҡортостанымды данлап ҡайтам. Бынан 5-6 йыл элек тә шундай уҡ симпозиумға саҡырғайнылар. "Башҡорттарҙың көндәлек тормошонда өҙләү" тигән доклад менән сығыш яһаным. Мине иң ҡыуандырғаны - башҡорт халҡының боронғо башҡарыу сәнғәте төрө булараҡ, өҙләүҙе Рәсәй музыка энциклопедияһының яңы баҫмаһына индереүгә булышлыҡ итеүем. Унан ҡала, оҙон көй жанрына ла аңлатма бирелә ошо энциклопедияла. Әйткәндәй, 1987 йылда беренсе тапҡыр Хәйбулла районында республика ҡурайсыларының Йомабай Иҫәнбаев исемендәге конкурсы үткәрелгәйне. Шунда халҡыбыҙҙың өҙләү кеүек уникаль башҡарыу оҫталығын тергеҙеү буйынса тәүге аҙым эшләнде, йәғни өҙләүселәрҙең дә сығыштарын әҙерләп, номинациялар булдырыуға өлгәшкәйнем. Ошо эшмәкәрлегемде өнәмәүселәр ҙә күп булды. Әммә бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамай, халҡымдың рухи хазиналарын тергеҙеүҙе һәм уны йәш быуынға таратыу бурысымды атҡарыуҙы дауам итә торам...

1995 йылда Сибай ҡалаһының 13-сө башҡорт мәктәбендә ул саҡта Сибайҙа эшләп йөрөгән зыялыларыбыҙҙың береһе - талантлы яҙыусы мәрхүм Аҫылғужа Баһуманов кәңәше буйынса сәсәндәр мәктәбе асып ебәрҙек. "Һәр сәсәндең үҙ мәктәбе булған, оҫталыҡ серҙәрен улар йәштәргә, балаларға биреп ҡалдыра килгән. Ә һин нимә көтөп йөрөйһең?" тип, Аҫылғужа ағай ныҡ ҡына ҡыҙҙырып алғас, ошо эште башлап ебәрергә йөрьәт иттем. "Урал батыр" эпосын өйрәнеү буйынса түңәрәк тип тә йөрөттөк беҙ уны тәүҙә. Бөгөн ошо инеш башының дарьяға әүерелеүенә үҙегеҙ шаһит: "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса республика кимәлендәге конкурс бөтөн халыҡ һөйөүен яуланы.

## Ҡатын-ҡыҙ - донъя тотҡаһы

Сибай ҡала башҡорттары ҡоролтайы эргәһендәге үҙем етәкләгән "Ағинәйҙәр ҡоро" хаҡында ла бер аҙ телгә алып китмәү яҙыҡ булыр, тип уйлайым. Бөтөн эштәребеҙгә фатиха биреп тороусы, ҡанатландырыусы, үҙҙәренең тормош рәүеше менән һәр яҡлап өлгө күрһәтеүсе, халҡыбыҙ аҡылын туплаған абруйлы ҡатын-ҡыҙҙар - атҡаҙанған мәғариф һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, табиптар, башҡа һөнәр эйәләре, хеҙмәт ветерандары йыйылған унда. Һәр береһе хаҡында китап яҙырлыҡ шәхестәр улар Светлана Буранбаева, Венера Йәнбәкова, Фәниә Сарбулатова, Фәниә Хәлитова, Файза Мусина, Фәрзәнә Фәтҡуллиналар.

"Ете ҡыҙ" студияһы ла "Ағинәйҙәр ҡоро" менән бергә эшләй. Бергәләшеп ҡашмау, селтәрҙәр яһауыбыҙ хаҡында әйткәйнем инде. Бынан тыш, ҡыҙҙарым кейеҙ баҫырға, тире эшкәртергә, ҡорама ҡорарға, туй юрғаны һырырға, аш-һыу әҙерләргә лә өйрәнә ағинәйҙәренән. Ә ағинәйҙәрҙең һәр береһе - торған бер хазина. Файза апай, мәҫәлән, аш-һыуға, ҡул эштәренә оҫта. Уның ырғаҡ менән бәйләгән бәйләмдәрен күргәҙмәгә генә ҡуйырлыҡ: өҫтәл ябыуҙары, мендәр тыштары, сигеүле-сәскәле түшәктәре, салфетка-һөлгөләре. Венера апайыбыҙ - буҙа оҫтаһы, шифалы был эсемлекте тирә-йүндә унан да тәмлерәк итеп яһаусы башҡа бер кемде лә белмәйем. Ағинәйҙәребеҙ оҫталыҡ буйынса ғына түгел, әсә, ҡатын-ҡыҙ булараҡ та үҙ кәңәштәрен, тормош һабаҡтарын бирә йөрөй йәштәребеҙгә. Уларҙың һәр береһенең йәшәү рәүеше - яҡты өлгө. Ә уларҙың тормош юлдаштары менән бер-береһенә ипле, наҙлы, йылы мөнәсәбәттәрен күрһәгеҙ икән! Әлбиттә, үҙ-ара ихтирам, ваҡыт һынауҙарынан һис уңмаған һөйөү көсө, татыулыҡ булмаһа, улар йәшәү рәүештәрен ожмахтай итеп ҡора алыр инеме һуң! Эргәбеҙҙә йөрөгән "Ете ҡыҙ" студияһы һылыуҡайҙарын, шулай итеп, гүзәллеккә, һөнәр төрҙәренә генә түгел, ә татыу ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, тормоштарын йәмләп, донъя тотҡаһы булып йәшәргә лә өйрәтәбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер ҡараһаң, Өфөлә, икенсе ҡараһаң, Ҡурғанда йә Силәбелә йөрөп ята Асия Солтан ҡыҙы. Саҡырған ергә бара, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады буйынса бай тәжрибәһе менән ихлас уртаҡлаша. Кәрәк икән, Сибайға ла белгестәр саҡыртып, уҡыусылары оҫталығын тағы ла камиллаштырыу өсөн бер ни менән дә иҫәпләшеп тормай. Бының өсөн матди сығымдар ҡаралмаған, аҡса юҡ, тип тә аптырамай, үҙ фатирында тотһа тота уларҙы, әммә уҡыусыларының саҡырылған педагогтан бөтөн файҙалы белемде алып ҡалыуына өлгәшә барыбер. Әлеге ваҡытта сәсәниә боронғо эпосыбыҙҙы һаҡлау, өйрәнеү һәм популярлаштырыу буйынса эшмәкәрлекте, шулай уҡ үҙе нигеҙ һалған сәсәндәр мәктәбен берләштереүсе "Урал батыр" үҙәге асыу хәстәре менән янып йөрөй. Әйткәндәй, быйыл сентябрҙә башҡорт халыҡ ижадын арыу-талыуһыҙ пропагандалағаны өсөн Асия Солтан ҡыҙына "Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем бирелде. Уны ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ, артабанғы ижад үрҙәрендә һүнмәҫ-һүрелмәҫ илһам теләйбеҙ!**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*ХӘТЕРКИТАП*

# ОНОТОЛҒАН МОҢ...

## йәки һеүләүҙәр тураһында

**Мин был хаҡта, йәғни халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадындағы һеүләү жанры тураһында элек тә яҙғаным булды редакцияларға. Тик бер гәзиттә минең мәҡәләләге "һеүләү" һүҙен "карттар һамаҡларҙар ине" тип, ә инде икенсе гәзиттә "карттар сеңләрҙәр ине" тип үҙгәртеп яҙҙылар. Шул арҡала ауылдаштарҙан тәнҡит һүҙҙәре лә ишетергә тура килгәйне.**

Ә бит ҡырҡынсы, илленсе йылдарҙа ғына әле "һеүләү" һүҙе халыҡ телендә киң ҡулланылды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө көндә был һүҙ халыҡ теленән бөтөнләй төшөп ҡалды. Уның сәбәбе шунда: 1917 йылдағы революциянан һуң, бигерәк тә 1930 йылдан башлап, халыҡтың аңын үҙгәртеү маҡсатында СССР-ҙа, бигерәк тә милли республикаларҙа, халыҡтарҙың телдән-телгә күсә килгән ауыҙ-тел ижадына ревизия яһау, унан дини һүҙҙәрҙе алып ташлау, уларҙы икенсе һүҙҙәр менән алыштырыуҙар башлана. Һеүләүҙәргә килгәндә, улар дини һүҙҙәр менән ныҡ сыбырланған була, шуға ла уны уҡыусыларға өйрәтмәйҙәр, сәхнәләрҙә сығыш яһағанда ла уны ҡулланмайҙар. Һеүләүҙе белгән ҡарттар донъя ҡуйып бөтөү менән был моң да онотолоуға дусар була.

Һеүләүҙәр ике юллыҡтан тора һәм улар оҙон көйҙәрҙең башланғысы булып тора. Оҙон көйҙәрҙәге һымаҡ, һеүләүҙәр ҙә төрлө темаға арнала, дини йүнәлештәгеләре лә байтаҡ була.

Ҡырҡынсы йылдар хәтирәләренә әйләнеп ҡайтайыҡ. Атайым 3-4 ҡартты ҡарсыҡтары менән бергә ашҡа саҡырып алыр ине. Ҡарттар бер яҡта, уларҙың әбейҙәре уларға ҡаршы яҡта ултырырҙар ине. Аш ашап, сәй эсеп алғас, вәғәз һөйләйҙәр, аҙаҡ һеүләшергә тотонорҙар ине. Ауыл мәзине, оҙонса буйлы, ҡаҡса йөҙлө, үтә лә моңло тауышлы күпер төбө Мөхәмәтйән (1888-1972) ҡарт һеүләй башлау менән уны янындағылар күтәреп алыр ине. Күмәкләп тәүге ике юллыҡты тамамлау менән араларынан берәү "Ай-бай-бай-бааай" тип һуҙып ебәреүе була, шуны ғына көтөп ултырған әбейҙәр икенсе ике юллыҡты башлар ине. Ана шулай алмаш-тилмәш ярты сәғәттәй һеүләшкәндән һуң, Мөхәмәтйән ҡарттың ишараһы буйынса туҡтарҙар ине. Беҙ, балалар, ҡарттарҙың был моңон тын да алмай тыңлар инек. Ә һеүләүҙең көйөнә килгәндә инде... "Ҡаҙ бәпкәләре һары икән", тип башланған йырҙың һуңғы ике юлы нәҡ ана шул һеүләү көйө булып тора ла инде. Ауылыбыҙҙа һеүләүҙең көйөн һәм ике юллыҡтарын күп белгән Ишбаев Таһир Хәсән улы һәм Ҡунысбаев Нуритдин Шафиҡ улы булды. Улар эштән һуң арып килеп ултырырҙар ҙа, тирҙәрен һөртә-һөртә, һеүләп ебәрерҙәр ине. Уларҙы ла, уларҙың һеүләүен дә һағынып һөйләргә генә ҡалды...

Ошо онотолған һеүләү моңон халыҡҡа кире ҡайтарырға ине. Моғайын, кемдәрҙеңдер хәтерендә һаҡланалыр әле ул. Ә минең иҫтә ҡалған һеүләү ике юллыҡтары ошолар:

Бабайҙар:
*Һыу төпкәйҙәрендә һис ҡара юҡ,*
*Хаҡ яҙмышты күрмәй сара юҡ.*
Әбейҙәр:
*Кешеләрҙән кеше һис кәм түгел,*
*Тик бәхеткәйҙәре тиң түгел.*
Бабайҙар:
*Маңлайыңа яҙған хаҡ яҙмышты*
*Һыпырып алып булмай ҡул менән.*
Әбейҙәр:
*Ҡиәмәттең йәме иман менән,*
*Был донъялар һөйгән йәр менән.*
Бабайҙар:
*Ни тип кенә яуап һин бирерһең,*
*Гүрҙәреңдә тупраҡ аҫтында.*
Әбейҙәр:
*Хаҡ яҙмышҡайҙарын күрмәйенсә,*
*Гүргә инмәй әҙәм балаһы.*
Бабайҙар:
*Ҡарт-ҡоролар тимә һин үҙеңде,*
*Ҡартайырһың ҡара йыландай.*
Әбейҙәр:
*Ҡыҙ балалар ниңә тыуа икән,*
*Үҙ бәхеткәйҙәре булмағас.*
Бабайҙар:
*Булма ла ғына малһыҙ, йөрөмә йәрһеҙ,*
*Камил донъя көтөр ваҡытыңда.*
Әбейҙәр:
*Һыуға һалған көмөш иремәһә,*
*Рыя иргә күңел иремәй.*
Бабайҙар:
*Ирмен тип тә берүк күкрәк һуҡма,*
*Йәмәғәтең итәк аҫтында.*
Әбейҙәр:
*Етемдәрҙе берүк рәнйетмәгеҙ,*
*Ҡара ҡарғыш төшөр башыңа.*
Бабайҙар:
*Бер уйлаһаң эштәр иҫ китәрлек,*
*Уйламайса донъя көтөрлөк.*

**Рәхимйән ВӘХИТОВ.**
**Күгәрсен районы Юлдыбай ауылы.**

ҠЫҘЫҠЛЫ ОСРАШЫУ

# БӨРЙӘН ЕРЕ...

## асылыма ҡайтарҙы



"Ағай, һаумыһығыҙ. Яңылышһам, ғәфү итегеҙ, һеҙ Бөрйәндән бит әле?" Өфө урамы буйлап китеп барған мәлдә күмәк ҡыҙҙар араһынан айырылып сығып, бер ҡыҙ ҡыйыуһыҙ ғына минә шулай тип өндәште. Аптыраулы ҡарашымды таныш булмаған ҡыҙға төбәнем, хатта бер аҙ маһайып та киттем, әй. Йәнәһе лә, мин бик танылулы һәм билдәле шәхес, хатта мине баш ҡала һынлы баш ҡалала танып торалар! Шаяртам, әлбиттә. Шул арала таныш булмаған ҡыҙ һүҙен дауам итте.

- Аптырамағыҙ, ағай. Һеҙҙе мин бер нисә мәртәбә Иҫке Собханғолда, район үҙәгендә, күргәйнем. Бына әле осрап, ҡалай һәйбәт булды. Күптән Бөрйән халҡына рәхмәт һүҙҙәремде еткерә алмай йөрөй инем.

"Һе, рәхмәт һүҙҙәрен еткереүе ҡыйын булмаҫ", тип уйлап ҡуйҙым шул саҡ.

- Ҡайғырма, һылыу, рәхмәтенде түкмәй-сәсмәй еткерермен.

- Ағай, ваҡытығыҙ булыуыбулмауы тураһында һорап та тормайым. Әйҙәгеҙ, ситкәрәк китеп, бер аҙ күңел серҙәремде асайым. Был ҡыҙыҡай үтә әрһеҙ икән, тип тә уйлап ҡуймағыҙ. Бер ынтылғанда һөйләп ҡалырға ине. Аҙаҡ, бәлки, ҡыйыулығым да, батырсылығым да етмәҫ. Ә инде минең һөйләгәндәрҙе тыңлағандан һуң бөрйәндәргә минең һәм әсәйемдең рәхмәттәрен нисек еткерерһегеҙ - уныһы һеҙҙең ҡарамаҡта...

Ҡыҙыҡ, бик ҡыҙыҡ, тип уйлап ҡуйҙым шул саҡ. Шаярта, тиһән, был ҡыҙ бала бер ҙә шаяртырға уйламай, шикелле. Өмөт менән ҡарап торған йәш кешенең һүҙен нисек йығаһың инде. Ҡыҫҡаһы, уны тыңларға булдым. Яҡындағы эскәмйәгә барып ултырҙыҡ.

- Мин Әлиә булам (исемен үҙе һорауы буйынса үҙгәртергә тура килде). Әлеге көндә юғары уҡыу йортонда белем алам. Эш шунда: быйыл миңә практиканы Бөрйән районында үтергә насип булды. Ҡала ҡыҙы булғанлығыр инде, ауыл ерен өнәп бөтмәйем мин. Дөрөҫөрәге, белеп етмәйем. Шуға күрә ауыл еренә барыу тураһында уй ике ятып бер төшөмә лә инмәне. Атайым, яйын табып, ҡалалағы һәйбәт кенә бер мәктәп менән дә һөйләшеп бөткәйне. Әммә нишләптер килеп сыҡманы. Шуныһы ҡыҙыҡ: миңә хатта Бөрйән районынан башҡа һайлау мөмкинлеге лә ҡалмағайны. Аптырап, бер алдымда ятҡан ҡағыҙға ҡарайым, бер өмөтлө күҙҙәремде уҡытыусыға төбәйем. Зинһар өсөн, мөйтәм, табығыҙ берәй яйын, апай, әммә ебәрмәгеҙ мине төпкөл Бөрйәнгә...

Әйткәндәй, ошо уҡытыусыны барыбыҙ ҙа хөрмәт итә. Әлләней оло ла түгел был апай. Тәү ҡарамаҡҡа, әллә ней төплө фекер ҙә әйтмәгән кеүек, әммә ябай, шул уҡ ваҡытта үҙенсәлекле кәңәштәре менән күбебеҙҙең күңелен яулап алғайны был уҡытыусы. Бына әле лә ул миңә бер тына аптыраған ҡиәфәттә ҡарап торҙо ла, ябай ғына итеп әйтеп ҡуйҙы:

- Ә нишләп аптырап ҡалдың, һылыу. Тотаһың да бараһың. Ваҡыт ней, һә тигәнсе үтә лә китә ул. Был фани донъяла бер нәмә лә бушҡа эшләнмәй, тип уҡытабыҙ бит. Бына һин быны үҙ миҫалыңда иҫбатлап ҡара әле...

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, мин хатта аптырап киттем. Ысынлап та, нимәнән ҡурҡып торам әле мин. Барам Бөрйәнгә! Шартлатып практика үтеп ҡайтам! Бергә уҡыған иптәштәрҙең дә күҙҙәре шар булһын! Атыу ҡайны берәүҙәре, Әлиә ауыл еренә бара алмай ул, тип көлөп тә йөрөйҙәр әле. Барам, хатта шуларға үс итеп барам ауылға, төшөп ҡалғандарҙан түгел әле мин!

Былдай уйҙарҙан һуң күңел күтәрелеп китте. Әммә бер әтнәкәһе бар. Татар ҡыҙы мин. Ә Бөрйәндә, белеүемсә, шау башҡорттар йәшәй. Улар мине нисек ҡаршы алыр, улар менән мин уртаҡ тел таба алырмынмы икән? Ошондайыраҡ һорауҙар борсоно мине. Ярай, мәйтәм, тотоп ашамаҫтар әле. Берәй яйы сығыр. Эстән генә теләктәр әйтеп, ныҡлы ҡарарға килдем - барам Бөрйәнгә, ҡаршы ал мине, башҡорт төбәге!

Ошо урында Әлиә миңә ҡарап, эскерһеҙ көлөп ебәрҙе.

- Шул хәтлем аптырап ҡарамағыҙ әле, ағай. Ана бит, аптырауҙан хатта ҡаштарығыҙ дуғалай бөгөлөп киткән.

Күрәһең, минең аптырау ысынлап та йөҙөмә сыҡҡандыр. Аптырарлыҡ та шул. Тап-таҙа башҡортса һөйләшеп ултырған кеше, мин сит милләт кешеһе, тип торһон әле. Рәхәтләнеп бер тына көлгәндән һуң, Әлиә һүҙен дауам итте.

- Ярай, һөйләп бөтәйем әле. Шунан минең хәлде аңларһың, ағай. Мин татар ҡыҙы, тип әйттем әйтеүгә, ә шулай ҙа үҙемде тап-таҙа ошо милләт кешеһе тип тә әйтә алмайым. Сөнки беҙҙең ғаилә ҡатнаш никахтан ҡоролған. Атайым - татар, ә әсәйем башҡорт минең. Бәләкәй саҡта рәхәт була торғайны. Тел һайлау тураһындағы уй ике ятып бер төшөмә лә инмәне. Ике телде бутап һөйләшеп тик йөрөнөм. Ә бына үҫә төшкәс, бер аҙ уйландыра башланы. Атайым - татар, әсәйем - башҡорт, ә мин кем булам инде? Үҫмер саҡта ошондай уйҙар мине йышыраҡ борсой башланы. Аңлашыла, гүмер баҡый ике телде бутап һөйләшеп йөрөп тә булмай. Барыбер бер ваҡыт миңә ике телдең береһен һайларға кәрәк буласаҡ. Уйландым-уйландым да, татар теленә өҫтөнлөк бирергә булдым. Был ваҡытта мин алтынсы-етенсе синыфта уҡый инем. Минең был ҡарарҙы әсәйем өнһөҙ ҡабул итте, ә атайымдың ҡыуаныслының иге-сиге булманы. Ошо мәлдән башлап минең көндәр күберәк атай менән үтә башланы. Аңламаған һүҙҙәрҙе ул йыбанмай аңлатты, һорашты, минең телмәрҙе гел тикшереп торҙо. Хатта урыҫ-татар һүҙлеге лә алып ҡайтып бирҙе. Бына ошолай мин тырышып-тырышып татар телен өйрәндем. Минең тырышыуҙар эҙһеҙ үтмәне, әлбиттә. Мәктәпте тамамлау осорона мин башҡорт телен бөтөнләйе менән оноткайным инде, үҙ тиҫтерҙәрем менән татарса ғына аралаша инем.

Ә нишләп мин татар теленә өҫтөнлөк бирҙем икән - был турала һорарыңды һиҙеп ултырам, ағай. Бәлки, атайымдың да йогонтоһо булғандыр, әммә миңә башҡорттарға ҡарағанда татарҙар күпкә етеҙерәк, сосораҡ тойолдо. Бәлки, мәктәптә уҡыған осорҙа быға артыҡ әһәмиәт тә бирмәгәнмендер. Ә инде аҙаҡ, юғары уҡыу йортона ингәс, был минең күҙгә нығыраҡ салына башланы, бугай. Ни тиһәң дә, донъя көткәндә тормош итәшендең сосораҡ булыуы арыу бит инде. Шуға күрә, буласаҡ иремде лә мин татар милләтенән булыр, тип уйлай инем. Бергә уҡыған студент егеттәр был фекеремде нығытты ғына. Татар егеттәре дәрес ваҡытында, белһә лә, белмәһә лә, ырғып тороп яуап бирәләр, имтихан ваҡытында нисек тә яйын табып, уны уңышлы тапшыралар, дейөм ятаҡта һәйбәтерәк бүлмә эләктереп өлгөрәләр... Ҡыҫҡаһы, өлгөрҙәр инде. Ә инде башҡорт егеттәре миңә аҡрынырак, ҡыйыуһыҙыраҡ тойолдо. Күп осраҡта, һаулыҡ булһын, насип итһә, барыһы ла булыр, тип, барына ҡәнәғәт булып, эре сиртерәп йөрөй бирәләр. Бына һеҙ, ағай, үҙегеҙ баһа бирәгеҙ әле. Иртәгә имтихан көнө, ә башҡорт егеттәре "уһ" та тимәй ҡурай уйнап, гармун тартып ултырыуы мөмкин. Йәнәһе лә, улар иртәнән һуңға концерт менән сығыш яһаясаҡ. Ярай, иртәнән һуңға уларға сығыш яһарға кәрәк, быны аңларға була, ә имтихан бит иртәгә! Нисек тыныс күңел менән ҡурай уйнап ултыра алаларҙыр инде, быны мин бер нисек тә аңлай алманым. Бына ошо сағыштырыуҙарҙан һуң, "Ярай әле татар телен һайлағанмын", тип ҡыуанып та ҡуя торғайным. Әммә миңә тормош яңы һынау әҙерләп ҡуйған икән.

Практикаға, йәғни Бөрйәнгә, мине атайым менән әсәйем оҙатып ҡалды. Атайым бигерәк шаштырып ебәрҙе. Әйтерһең дә, мине тәү тормош быуаты осоронда йәшәгән төбәккә оҙата.

Унда улайтма, бында былайтма, тегеләй булһа - шулайт, былай булһа - былайт, тауға менмә, ҡолап төшөрһөң, муйыл йыйма, айыу килеп сығыр, еләк йыйма, йылан сағып ҡуйыр, һыуға төшмә, батып ҡуйырһың, урманға инмә, аҙашып ҡуйырһың - ҡыҫҡаһы, эштәр хөрт була ҡалһа, миңә шунда уҡ шылтырат, шунда уҡ барып алырмын. Ә әсәйем тыныс ҡына: "Минең теләктәр Аллаһы Тәғәләнең "Амин" тигән сағына тура килһен, беҙҙе ҡыуандырып, матур йөрөп ҡайт, ҡыҙым", - тип кенә ҡуйҙы.

Бына әле мин Бөрйән ерендә баҫып торам. Мине алып килгән такси яй ғына ҡуҙғалып китеп тә барҙы. Бер урында бер килке тапанып торғас, йәшәйәсәк йортҡа табан ыңғайланым. Унда минән башҡа тағы дүрт башҡорт ҡыҙы йәшәргә тейеш, тип алдан әйткәйнеләр. Мин бишенсеһе булам инде. Улар мине нисек ҡаршы алыр, нисек бергә йәшәп алып китербеҙ? Ошондай борсоулы уйҙар менән йәшәйәсәк йорт эргәһенә яҡынлашам. Тәү ҡарамаҡҡа бәләкәй генә булһа ла, апаруҡ ҡына ҙур йорт икән. Тышта аяҡ кейемдәре теҙелеп ултыра. Тимәк, теге ҡыҙҙар иртәрәк килеп өлгөргән. Мин ишек төбөндә туктап, бер аҙ баҙап ҡалдым. Ишек туҡылдатайым тиһәм, уныһы бер аҙ асыҡ булып сыҡты. Ярым асыҡ ишек аша башҡорт ҡыҙҙарының тыныс ҡына һөйләшкәне ҡолаҡҡа салынды. Юлдаш каналы бында ла тота икән. Унан талғын ғына йыр ишетелә. Ә йыры... Йыры ниндәй бит әле!

*Телеңдең киләсәге лә тик*
*һинең ҡулыңда,*
*Ул бит беҙҙең хазинабыҙ,*
*һин шуны онотма.*
*Әсә телен үлтереүгә,*
*башҡортом, юл ҡуйма.*
*Көс-ғәйрәт,*
*түҙемлек бир, Аллам -*
*Башҡортмон тип*
*күкрәгемдә ҡағам!*

Бына, ағай, иң ҡыҙығы ошо мәлдә башланды ла инде. Үҙем дә аптырап киттем, минең менән әллә нимә булды ла ҡуйҙы. Быны нисек кенә һүрәтләһәм дә тулыһынса аңлата алмаҫмын кеүек. Әллә башҡортса телмәр ишетеүҙән, әллә радионан яңғыраған ошо йыр тәьсиренәнме, белмәйем, әммә ниндәйҙер көс минең күңелдәге ниндәйҙер ҡоршауҙы алып ташланы. Әйтерһең дә, ниндәйҙер ҡойон килеп уйнаны ла, нисәмә йылдар буйы төҙөгән кәртәне бер нисә секундта пыран-заран туҙҙырып, емереп китте лә барҙы. Мин ниндәйҙер рәхәтлек кисерҙем. Яйлап күңел ниндәйҙер йылылыҡ менән тула барҙы. Бәлки, быны һүҙ менән аңлатыуы ла мөмкин түгелдер. Бәлки, мин һөйләгәндәр бигерәк китапса килеп сығалыр. Әммә шуны ғына әйтә алам: ҡапыл күңелем тулып китте. Үҙем дә һиҙмәҫтән, күҙҙән йәштәр ағыла башланы. Ҡыҙҙар һиҙеп ҡалмаһын, тип, шым ғына сеңләп торам. Әммә һиҙмәй булалармыни һуң! Бер аҙҙан ҡыҙҙар шатыр-шотор йүгереп килеп тә сыҡтылар. Бер килке шымып торғандан һуң береһе әйтә ҡуйҙы: "Дә-ә-ә, эштәр хөрт, килеп тә етмәгән, әсәһен һағынып та өлгөргән был ҡыҙ..." Әсәйем тураһында ишеткәс, мин оторо ярһып илай башланым. Саҡ тынысландырып алдылар. Ә күңелемде шундай наҙ биләп алды, хатта мин ошо мәл әсәйемде күрер өсөн генә ҡайтып китергә лә әҙер инем.

Бына шулай, ағай, мин Бөрйәндә үҙ асылыма ҡайттым да ҡуйҙым. Ә инде практика осоронда ошо мөхиттә йәшәү мине тулыһынса үҙгәртте. Мин рәхәтләнеп (башҡорттар, әйтмешләй, ауыҙ тултырып) әсәм телендә һөйләшеп йөрөй башланым, башҡорттарҙың холҡон, йәшәү рәүешен дә нығыраҡ аңлай барҙым. Әйткәндәй, әсәм телен мин бөтөнләй онотмағанмын да икән, бер ниндәй ауырлыҡһыҙ ғына һөйләшеп алдым да киттем. Нисәмә йылдар башҡорт телен үҙемдә көсләп биклләп тотҡанмын ғына икән.

Бына ҡайтыр мәл етте. Кәрәкле ҡағыҙ-фәләндәрҙе тултырып бөткәс, ошо эште башҡарған апай әйтә ҡуйҙы: "Документ тултырғанда иғтибарлыраҡ булырға кәрәк, һылыу. Күптәр уға бер кәрәкмәгән ҡағыҙға ҡараған һымаҡ ҡарай ҙа ҡуя. Бына һин, һылыу, милләтенде дөрөҫ яҙмағанһың. Хата киткән. "Милләт" тигән графаға үҙ ҡулдарың менән "Татармын" тип яҙып ҡуйғанһың. Киләсәктә иғтибарлыраҡ бул!" Ирекһеҙҙән, көлөмһөрәп ҡуйҙым. Юҡ шул, апай, графала түгел, ә тотош тормошомда хата китә яҙған минең. Әгәр Бөрйәнгә килмәһәм... Белмәйем, киләсәгем ниндәй булыр ине икән, мин уны күҙ алдыма ла килтерә алмайым. Дөрөҫөрәге, күҙ алдыма килтереп, ҡурҡып ҡуям.

Бына шулай, ағай, Бөрйән мине үҙ асылыма ҡайтарҙы. Ошо башҡорт төбәгенә әсәйем менән минән ҙур рәхмәт! Ә инде бөрйән халҡына беҙҙең рәхмәттәрҙе нисек еткерәһегеҙ - уныһы һеҙҙең ҡарамаҡта. Әйткәндәй, әле яңыраҡ бер башҡорт егете менән танышттым әле. Ҡурайҙа шәп уйнай. Уйнаһын, әйҙә! Насип итеп, киләсәктә бергә булырға яҙһа, ул ҡурайҙа уйнар, ә мин йырлармын. Гөрләтеп донъя көтөрбөҙ, Алла бирһә...

Бер аҙ һөйләшеп ултыра биргәндән һуң, минең менән йылы һаубуллашып, Әлиә мыжғып торған халыҡ араһында инеп тә юғалды. Ә мин районға ҡайтып еткәс тә, ҡулыма ҡағыҙ-ҡәләм алдым. Ошо мәҡәләм аша Әлиәнең рәхмәт һүҙҙәрен Бөрйән халҡына еткерергә булдым...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

**Бөгөнгө көндә донъя мәҙәниәте картаһынан "милли кинематограф" тигән төшөнсә бөтөнләй юҡҡа сыға барған ваҡытта башҡорт киноһының яйлап булһа ла үсеш алыуы, үҙебеҙҙең бынамын тигән шәп режиссерҙарыбыҙ барлыҡҡа килеүе яҡшы күренеш. Республикала профессиональ кино бармы? Милли кино дәүләт ярҙамынан тыш үсешә аламы? Төп бурысы милли кинематография үсешен тәьмин итеү булған киностудияның бөгөнгө хәле нисек? Ошо һәм кино сәнғәтенә ҡағылышлы башҡа һорауҙарға 50-нән ашыу фильм авторы, Рәсәй һәм Башҡортостан кинематографистар союзы, Рәсәй кинорежиссерҙар Гильдияһы ағзаһы, Евразия телевидение һәм радио академияһының мөхбир-ағзаһы, "Башҡортостан" киностудияһы директоры Азамат Шәриф улы ХУЖАХМӘТОВ менән яуап эҙләйбеҙ.**

# МИЛЛИ-ЭТНИК ФЕСТИВАЛЬ...

## башҡорт киноһын үҫтерәсәк



### Милли фильм тәрбиәләргә тейеш

Кино төшөрөү ҙур сығымдар талап итә. Бына шуның өсөн дә сәнғәттең был төрөнә үҙаллы, дәүләт ярҙамынан тыш көн күреүе ауырға төшә. Әлбиттә, беҙ бөгөн милли киноға иғтибар күберәк булыуын теләр инек. Тик башҡа төбәктәрҙең хәле күпкә ауырыраҡ икәнен күҙ уңында тотҡанда, беҙ ул тиклем көрсөктә түгел әле, шөкөр. Ғөмүмән, сәнғәттең һәр төрө үҙ эшенең оҫталары иҫәбенә йәшәп килә, кино төшөрөүселәр араһында ла бер нәмәгә лә зарланмайынса, мөмкинлектәр табып, үҙ хыялдарын тормошҡа ашырыусылар күп. Тап улар башҡорт киноһын бар итә, уны үҫтерә һәм камиллаштыра. Республикала һәләтле кинорежиссерҙар байтаҡ, киностудия уларҙың барыһын да штатҡа ала ла алмай. Беҙҙә уларҙың бер өлөшө генә эшләй.

Милли кино сәнғәтенә инвесторҙар йәлеп итеү ҙә әлегә ауыр мәсьәлә. Бер кем дә кино төшөрөүгә аҡсаһын былай ғына бирмәй. Уларҙы йә шәп проект ҡыҙыҡһындырасаҡ, йә абруйлы, данлыҡлы берәй исем ылыҡтырасаҡ. Быларҙың икеһе лә булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Иң мөһиме, бай кешенең башҡорт киноһына ышанысы, тимәк, уның үҙ халҡын фиҙаҡәр һөйөүе кәрәк. Ҡыҙғанысҡа күрә, әлегә беҙҙә был йәһәттән маҡтанырлыҡ өлгөләр юҡ. Кино фондына ла йыл да ғариза бирергә тырышабыҙ, әммә әлегә унан ярҙам алғаныбыҙ булманы.

Шулай ҙа "Башҡортостан" киностудияһы эшмәкәрлеген дауам итә. Күберәк ҡыҫҡа метрлы, аҙ бюджетлы фильмдар төшөрәбеҙ. "Ҡыҫҡа метрлы фильм менән генә милли кино сәнғәтен үҫтереп буламы?" тигән һорауҙы минә йыш бирәләр. Кино төрлө булырға тейеш. Әлбиттә, мөмкинлектәр булғанда, исмаһам, ике йылға бер тапҡыр булһа ла тулы метрлы фильм төшөрергә лә кәрәк. Әлегә Айсыуаҡ Йомағоловтың "Ел аулаусы" фильмы - киностудияла төшөрөлгән тулы метрлы аҙаҡҡы фильм. Уға республика һәм федераль сығымдар һалынды. С. Бондарчук исемендәге "Волоколамск сиге" VII Халыҡ-ара хәрби-патриотик фильм фестивалендә кешенең әхлаҡи матурлығын көүҙәләндергәне өсөн махсус приз менән бүләкләнгән был фильм киң прокатҡа сыға алманы. Үкенескә күрә, Рәсәй кино прокаты менән шөғөлләнеүселәр уның милли колоритлы булыуы менән тамашасыға ҡыҙыҡлы булмаясаҡ, тип тапты шикелле. Ә бит кинематограф һәр эше менән тәрбиәүи функция үтәргә тейеш. Бәлки, шуның өсөн дә милли кино коммерция киноһына әүерелә алмайҙыр, сөнки ул һәр ваҡыт ошо хәҡиҡәтте күҙ уңында тотоп ижад ителә. Тамашасы кино ҡарағанда үҙен герой менән сағыштырып ҡарарға, яҡшылыҡтың яуызлыҡты еңеүенә ҡыуанырға, фильмда үҙенсә йәшәргә тейеш.

### Йортло булдыҡ

Киләһе йыл "Башҡортостан" киностудияһы 25 йыллыҡ юбилейын байрам итә. Һәр төбәктең киностудияһы, кино төшөрөүгә дәүләт ярҙамы юҡ, был йәһәттән беҙ күпкә бәхетлебеҙ. Элек союздаш республикаларҙа ғына киностудиялар төҙөү рөхсәт ителгәнлектән, Башҡортостанда ул ваҡытта киностудия булмай. Союз мәлендә үк кино сәнғәте яҡшы үсешкән дәүләттәрҙең бөгөнгө хәле беҙҙекенә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Сөнки булған база Советтар Союзы тарҡалғас та уларҙа тороп ҡалған, һәр хәлдә, уларҙың үҙ бинаһы бар. "Башҡортостан" киностудияһының ошоға тиклем үҙ йорто ла булманы, бер бинанан икенсеһенә күсенеп йөрөүҙәр уның рухын ҡаҡшата алманы, әлбиттә, шулай ҙа ауыр ине. Быйыл беҙ, шаяртып әйткәндә, 10-сы юбилей күсенеүен тағы кисерҙек. Хәҙер киностудияның баш ҡаланың "Ағиҙел" бисҭәһендә ике бинаһы бар. Күптәр беләләр, Затонда кино төшөрөү павильоны эшләй алдыҡ. Киностудия өсөн был павильон бик кәрәк ине, унда кино, сериалдар төшөрөүҙән тыш, күргәҙмәләр ойоштороғра, спектаклдәрҙең телевизион версияһын төшөрөргә мөмкин буласаҡ. Унан һуң, беҙҙең эргәлә кинопавильондар юҡ, тимәк, беҙ уны арендаға ла бирә аласаҡбыҙ.

"Башҡортостан" киностудияһы прокат ойошмаһы ла. Дәүләт һәм муниципаль кинотеатрҙарҙа барған фильмдарҙы беҙ һайлап алабыҙ. Бөгөнгө көндә Рәсәй кино баҙарында Голливуд төп урынды биләй, финанс яғынан ҡарағанда, Рәсәй прокатының 80 проценты Америкаға китә. Иң хәүефлеһе шул: был боевик, мистика, фантастикалар нигеҙендә икенсе ҡиммәттәргә өҫтөнлөк бирәсәк яңы быуын тәрбиәләнә. Милли фильмдарға йөрөүселәр аҙ, мәҫәлән, 2013 йылда дәүләт аҡсаһына Рәсәйҙә төшөрөлгән фильмдарҙың 10 проценты ғына үҙенең хаҡын ҡайтара алған. Ә был фильмдарҙы исемдәре дингеҙ арьяғында билдәле булған режиссерҙар төшөргән, быға етди компаниялар ҡатнаштырылған, ҙур аҡсалар һалынған. Бөгөн тамашасыны Рәсәй фильмдарына йәлеп итеү эшмәкәрлеге алып барыла барыуын. Ошо шарттарҙа башҡорт киноһының республикала булһа ла үҙенең тоғро тамашасыһы булыуы шатлыҡлы.

### Кино фестивале - Өфөлә

27-29 ноябрҙә Өфөлә "Аҡбуҙат" Милли һәм этник кино халыҡ-ара фестивале үтәсәк. Республикала "Ер һәм Кешеләр" Төбәк-ара телевизион фестивале бер нисә тапҡыр үткәйне. Әммә быңдай форматта һәм тап ошо йүнәлештә әлегә фестиваль булғаны юҡ. Шуға ла беҙ бер кемде лә ҡабатламайбыҙ, тип кенә әйткем килә. Халыҡ-ара фестиваль булараҡ, унда ҡатнашыусылар күп буласаҡ. Әлеге мәлдә уларҙың барыһы ла үҙ эштәрен конкурсҡа ебәрә, ойоштороусылар халыҡ-ара жюри өсөн фильмдар һайлау эше менән мәшғүл.

Республикала йыл һайын үк булмаһа ла, мәҫәлән, ике йылға бер үтеп торған кинофестиваль үткәреү идеяһы менән күптән яна инек. Теге йәки был сәбәптәр менән уны әлегәсә тормошҡа ашыра алмаһаҡ, былтыр фестиваль үткәреү һәм кино төшөрөү өсөн тәғәйенләнгән павильонды йыһазландырыуы өсөн Президент грантына лайыҡ була алдыҡ. Әлбиттә, фестиваль үткәреү тәжрибәһе юҡ, әммә беҙ уны нисек эшләргә кәрәклеген беләбеҙ. Ә бына төрлө кимәлдәге фестивалдәрҙә ҡатнашыу тәжрибәһе ҙур. Рәсәй кимәлендәгеләрен иҫәпкә алмағанда, 2013-2014 йылдарҙа 50-нән ашыу халыҡ-ара фестивалдә ҡатнашып, киностудия фильмдары 30 диплом һәм бүләккә лайыҡ булды. Вилүрә Иҫәндәүләтованың Ирек Зарипов тураһындағы "Ике килгән ғүмер" документаль фильмы Миланда Халыҡ-ара спорт киноһы фестивалендә юғары баһаланды. Мультипликаторҙарыбыҙ күптән донъя кимәленә сыҡҡан.

"Аҡбуҙат" кинофестивалендә фильмдар өс - тулы метрлы, ҡыҫҡа метрлы, документаль фильм жанрҙарында баһаланасаҡ. 30-ҙан ашыу фильм һайлап алынды. Өфөлә өс көн дауамында кинофестиваль рухы гөрләп торасаҡ. Сараны тантаналы асыу, ҡыҙыл балаҫ буйлап үтеү, һәләтле кино төшөрөүселәр - былар барыһы ла буласаҡ. Конкурсҡа ҡатнашҡан киноларҙы жюри ағзалары, төшөрөүселәр менән бергә тамашасылар ҙа ҡарай аласаҡ, улар Актерҙар йортоноң залында күрһәтеләсәк. Документаль фильмдарҙы "Родина" кинотеатрында күрһәтәбеҙ. Һәр фестиваль урындағы милли кинематографияны үҫтереүгә булышлыҡ итә. Фестивалдән һуң кемдер башҡорт киноһы тураһында һүҙ йөрөтә башлай икән, башҡорт киноһы Рәсәйҙә генә түгел, сит илдә лә танылыу ала икән, маҡсатыбыҙға өлгәштек, тигән һүҙ. Мәҙәниәт йылында республикала кинофестиваль үтеүе һәр кем - кино төшөрөүселәр өсөн дә, кино һөйөүселәр өсөн дә ҙур ваҡиғаға әүерелһен ине.

### Иң яҡшыһы булырға тейешһең

Кино өлкәһенә мин телевидение аша килдем. 1991 йылда ВГИК-тың режиссура факультетына профессор Виктор Лисаковичтың оҫтаханаһына уҡырға ингәндә унда мультипликатор булып эшләй инем. Уҡыу йортон тамамлағандан һуң телевидениела башта режиссер, аҙаҡтан художество етәксеһе булдым, документаль, бөтәһенә лә билдәле "Таныш түгел таныштар" кеүек музыкаль-нәфис фильмдар төшөрҙөм. 2000-2002 йылдарҙа Мәскәүҙә Александр Политковскийҙың студияһында эшләү бәхете тейҙе. Был йылдарҙа ҙур тәжрибә тупланды, Политковский кеүек үҙенсәлекле фекерле, ижади кеше менән аралашыу үҙе оло мәктәп булды. Унда режиссер булараҡ ҡына түгел, журналист булараҡ та эшләргә тура килде. Шул саҡ бер нәмәгә төшөндөм: ҡайҙа ғына булһаң да, нимә генә эшләһәң дә, һин бар нәмәне лә яҡшы итеп башҡарырға тейешһең, юғиһә, һинең урыныңда башҡалар буласаҡ.

Өфөгә ҡайтҡас, СТС Өфө телеканалы асырға ярҙамлашып, унда ун йылға яҡын генераль директор вазифаһын башҡарҙым, "Башҡортостан" киностудияһына күскәнсе йылға яҡын "Рәсәй-Башҡортостан" каналында эшләп алдым. Телевидениела эшләгәндә үҙем теләгән нәмәләрҙе төшөрә ала инем, шуға ла был осор ижади яҡтан үҙемде асыу йәһәтенән иң бәхетлеһе булғандыр. СТС каналында менеджер һөнәрен энәһенән ебенә тиклем өйрәнергә тура килде. Шулай ҙа кино төшөрөү күнелемә яҡыныраҡ ине, шуға киностудияға эшкә килергә ризалаштым да инде. Бер кемгә лә сер түгел, ул саҡта был ойошманың финанс проблемалары бар ине, шулай уҡ милли киноның торошо, уның талғын үҫеше күңелемә тынғы бирмәй ине. Кемгәләр, бәлки, әле лә башҡорт киноһы насар үҫешә кеүек тойолор, әммә был йәһәттән алға китеш бар, тип әйтер инем. Кино ла төшөрәбеҙ, кинопрокат та үҫешә. Былтыр "Визит" фильмын төшөрөү өсөн Президент грантын яуланыҡ. Режиссер булараҡ, фильмдар төшөрөү тураһында хыялланам, әлбиттә, әммә әлегә быңдай теләгемде тормошҡа ашырыу кисектерелеп килә. Быңа киностудияның хәлен бер аҙ яйға һалһаҡ, бәлки, нимәләр тотонормон да.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ашаған белмәй, тураған белә" тигән тапҡыр мәҡәл киностудияның эшмәкәрлеген тулыһынса сағылдыра алыр ине, моғайын. Ысынлап та, башҡорт киноһы юҡ ул, беҙҙә кино төшөрә беләләрме, тип әйтеүселәр үҙҙәренең ни тиклем хата фекерҙә булыуын аңлаһа ине. Финанс ҡытлығы Рәсәйҙә бөтөн кимәлдә лә ҡуҙәтелә, әхлаҡи ҡиммәттәр үҙгәргән, мәҙәниәт менән сәнғәткә тейешле иғтибар булмаған мәлдә йылына бер-нисә ҡыҫҡа метрлы булһа ла фильм төшөрөү үҙе үк уңыш. Унан һуң, бар эшмәкәрлеге башҡорт киноһын үҫтереүгә йүнәлтелгән киностудияның башҡа мәшәҡәттәре лә байтаҡ - архивта яҡтан фильмдарҙы тергеҙеү, ресраврациялауға матди саралар табыу, элекке кинотаҫмаларҙы, магнит таҫмаларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн цифрлы форматҡа күсереү, дәүерҙең данлыҡлы шәхестәре тураһында фильм-портреттар төшөрөү, ваҡиғаларҙы киножурналға индереп барыу шулай уҡ улар иңенә төшә. "Ә башҡорт киноһы бармы ул?" тигән һорауға яуапты, моғайын, барыбыҙ ҙа ай аҙағында буласаҡ кинофестивалдә күрербеҙ.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

✓ **_Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урынды биләй._**



ИНТЕРНЕТТАН



# АС КӨЙӨНСӘ... уй уйлама

■ Халыҡ-ара ғалимдар төркөмө лидерлыҡ сифаттары менән бәйле ДНК молекулаһын асыҡлаған. Йышыраҡ осраҡта, лидерлыҡҡа ынтылыу нәҫелдән күсә икән. Ғалимдар 4 мең кешенең эшенә, үҙен уратып алған кешеләргә мөнәсәбәтен генетик яҡтан тикшереп, лидерлыҡ һәләтен күрһәтеү тенденцияһы менән rs4950 генотибы бәйле булыуы билдәләнгән. Әммә ғалимдар үткәргән тәжрибәләр күрһәтеүенсә, генетика ыңғай тышҡы мөхит тәьҫире менән берләшкәндә генә кеше уңышлы лидер булып китә ала. Тыумыштан кемгәлер лидер позицияһына сығыу һәм унда нығыныу мөмкинлеге бөтөнләй бирелмәһә лә, лидерлыҡ сифатының бер өлөшөн тәрбиәләп була, ти ғалимдар.

■ Белгестәр әйтеүенсә, тап цивилизация ҡаҙаныштары кешегә ҙур зыян килтерә. Бөгөнгө кешенең тормошонда гигиена ла, комфорт та бар, әммә сәләмәт булыу өсөн иң кәрәклеһе булған хәрәкәт юҡ. Хатта балалар ҙа хәрәкәтле уйындарға ҡарағанда компьютер уйындарын хуп күрә. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы үткәргән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Евросоюз илдәрендәге бөтә үлемдәрҙең 10 проценты - аҙ хәрәкәтләнеүҙән. Бындай хәл бөгөн күп илдәрҙә күҙәтелә. Кеше көндәлек тормошонда ни тиклем заманса ҡоролмаларҙы күберәк һәм йышыраҡ ҡуллана, шул тиклем аҙыраҡ хәрәкәт итә. Бындай шарттарҙа, әгәр ҙә кеше үҙенә-үҙе ярҙам итмәһә, фән дә, медицина ла ярҙам итмәйәсәк, ти ғалимдар.

■ Магазин кәштәләрендә төрлө ят яҙыҡтүлек байтаҡ ҡына. Мәҫәлән, уларҙың береһе - авокадо сәләмәтлеккә бик файҙалы икән. Американың Nutrion Impact компанияһы тикшеренеүселәре авокадо кеше организмында матдәләр әйләнешен нормаға килтерә ала, тип иҫәпләй. Ғалимдар 7 йыл дауамында 17,5 мең кешене күҙәтеп, көн һайын авокадо ашаусыларҙа метаболик синдром үҫеше хәүефе ныҡ түбәнәйеүен асыҡлаған. Әлегә сәләмәтлеккә авокадоның йоғонтоһо тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән. Яуап биреүселәрҙең сәләмәт өлөшө шулай уҡ йәшелсә, емеш-еләк һәм витамин, микроэлементтарға бай ризыҡтарға өҫтөнлөк биреүе тураһында белдергән.

■ Халыҡ, астың асыуы яман, ти. Шулай уҡ ас көйөнсә мөһим ҡарарҙар ҡабул итергә лә ярамай икән. Макс Планка институты ғалимдары фекеренсә, асығыу тойғоһо кешене уйланылмаған ҡабалан аҙымдарға этәреүе ихтимал. Баҡтиһәң, ашҡаҙан буш ваҡытта ҡарар ҡабул итеүгә баш мейеһенең бөтөнләй икенсе өлөшө яуап бирә икән. Ғалимдар емеш-еләк себенендә тәжрибә үткәреп ҡараған һәм уның ас ваҡытта хәүефкә барыу механизмы нисек эшләүен асыҡлаған. Ваҡ себендәр инстинктив рәүештә углекислы газдан ҡурҡа, әммә асыҡҡан мәлдәрендә улар газға ҡарамайынса аҙыҡҡа яҡынлаша. Ғалимдар фекеренсә, был нервы системаһының ике өлөшөнөң компромисы һөҙөмтәһе, бындай компромисҡа кешенең нервы системаһы ла һәләтле.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урынды биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

АҢДАН - ҠАНҒА, ҠАНДАН - ЗАҢҒА

# КҮҢЕЛ ҺЫЙЫНЫР ТӨЙӘК -

## ул тыуған йорт, тыуған ауыл

**Халҡыбыҙҙың тәрбиә ҡанундары менән ҡыҙыҡһына башлағандан алып, мине бер нәмә һоҡландыра: ул да булһа, әлегәсә һаҡлана килгән төп сифаттарҙың береһе - рухи ныҡлыҡ. Халҡыбыҙ рухи ныҡлығын, рухи сәләмәтлеген, сафлығын нисек һаҡланы икән? Ошо һорауҙарға яуап табыу өсөн боронғоларҙың аҡылына күҙ һалырға кәрәк. Ниндәй генә ауыр мәлдәрҙә лә рухы ҡаҡшамаған халҡым ниндәй аҡыл менән йәшәгән икән? Гәзитебеҙҙең был рубрикаһындағы сығыштар ошо һорауға яуап бирергә тейеш тә инде. Был юлы ғаиләһендә халҡыбыҙҙың тәрбиә ҡанундарын ныҡ һаҡлаған, балаларын шул рухта тәрбиәләгән, хәҙер инде баҡыйлыҡҡа күскән ир уҙаманы, сикһеҙ илһөйәр Рәфҡәт ХӘЙРЕТДИНОВтан ишеткән хәтирәләрем менән уртаҡлашмаҡсымын.**



### Ауылыбыҙҙың тарҡалыуы

Күгәрсен районындағы Башҡорт Бөркөтө тигән гөрләп торған ауылыбыҙ Никита Хрущев етәкселек иткән йылдарҙағы сәйәсәт һөҙөмтәһендә, ул ғына ла түгел, ул саҡтағы урындағы етәкселәрҙең ашығыс, уйламай-нитмәй хәл итеүҙәре арҡаһында күҙ асып йомған арала тарҡала башланы.

Беҙ китһәк, быуаттар буйы кеше күңеленә йылылыҡ һирпеп торған ауылдың үҙе лә, ғәжәп матур исеме лә юҡҡа сығасаҡ, балаларыбыҙҙың күңел һыйыныр төбәге лә ҡалмаясаҡ. Китмәйек беҙ бынан, тип, бер туған һеңлем Венера, мин, Мәрзиә менән Сәғит Ҡотлобаевтар нигеҙебеҙҙе һыуытмай тороп ҡалдыҡ. Туҡһан йәштән уҙып киттем инде, әммә тыуған төйәгемде ташламаным. Был нигеҙ урынын балаларым үҙ балаларына күңел һыйыныр төйәк итеп тотор, тип ышанам.

Башҡорт Бөркөтө тигән ауыл кемгә ҡамасауланы икән? Бер генә лә "киләсәкһеҙ" тип әйтерлек урыны юҡ. Ул йылға, ул уңдырышлы ер, һәр ваҡыт еләҫ ел иҫеп тороуы үҙе генә ни тора! Ә ҡоштарҙың түгелеп-түгелеп һайрауы! Магазины менән мәктәбен япһаң, әллә ниндәй ауылдарың да, ҡасабаларың да бөтәр. Мин колхоз рәйесе булған саҡта, ошо бәләкәй генә ауылда күпме мал, күпме умарта булды. Хөкүмәткә күпме тапшыра торғайныҡ. Ере уңдырышлы, ике яҡтан шишмәләр ҡушылғандан бар булған Оҙон шишмә йылғаһы иҫ китмәле еләҫлек бирә. Ни сәсһәң, шул үҫте. Халҡы эшсән, татыу булды. Өй һайын етешәр-унар бала баҡтылар. Кистәрен ауыл йәштәре гөрләтеп уйынға сығырҙар ине. Ҡайынлыҡта уйнай-уйнайҙар ҙа, ауыл көйөн йырлап, урам буйлап үтәләр ине. Ошолар барыһы ла емерелде. Ауыл күрке ус менән һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Өлкәндәр мәктәбе, өлкәндәр тәжрибәһе, кешенең күңел донъяһы бөтөнләй иҫәпкә алынманы. Кеше яҙмышы ботарлана. Йорт күсереү, ауыл бөтөрөү - өлкәндәр өсөн оло хәсрәт. Ҡарт ағасты урынынан ҡуҙғатһаң, яңынан тамыр ебәрә алмай. Сит ауылға күсеп киткән тиҫтерҙәремдең береһе лә ҡалманы. Рәхмәт балаларыма, мине ирекһеҙләмәнеләр. Башҡалар ҙа быны иҫкә алһындар ине, ауылда йәшәгән өлкәндәрҙе мөмкин тиклем ҡуҙғатмаһындар, йышыраҡ ҡайтһындар, бергә йыйылып, оло байрам ҡорһондар. Ололар тәжрибәһен өйрәнһендәр ине... Ауылдарҙы бөтөрөү - халҡыбыҙ өсөн оло юғалтыу. Кеше яҙмышын ғына түгел, халыҡ яҙмышын ботарлау ул.

### Һуғыш ауырлығын да татыныҡ

Һуғыш ауырлығы ирҙәр иңенә генә түгел, тылда ҡатындарыбыҙ елкәһенә лә төштө бит. "Беҙҙең баш осонда пулялар һыҙғырманы. Башҡаһына сыҙап булды", - тип кенә ҡуя ине Хәзирәм дә. Ә уның күргәндәрен хәтергә алһам, әле лә табандарым зымбырлап китә.

Ә хәл былай була. 1942 йылда, мин фронтҡа киткәс, бер нисә ҡатынҡыҙҙы, шул иҫәптән Хәзирәне лә район хәрби комиссариатында бер аҙ уҡырға йөрөтөп, хәрби билет тапшырғандар. 1944 йылда тағы саҡырып алып, хәрби бурыстың ниҙән ғибәрәт булыуын, уларҙың ни эшләргә тейешлеген аңлатҡандар. Баҡһаң, фашистарҙан азат ителгән Украинаға улар Башҡортостандан мал ҡыуып алып барырға тейеш булған! Хәҙер уйлап ҡараһаң, уйылып китерлек бит! Башҡортостан еренән нисә саҡырымдар араға 17-18 йәшлек ҡыҙҙар мал ҡыуып барһын әле! Йәйәүләп, аслы-туҡлы... Үҙеңә ашарға, малды ашатырға, һыу эсерергә... 106 баш һыйыр малы, шул иҫәптән нәҫел башмаҡтары, бер нисә үгеҙ, юлда һауып эсер өсөн 3 һауын һыйыр туплап алғандар. Дүрт еткән ҡыҙ, ике үҫмер малай. Әбсәләм (Сәйетҡол) ауылынан - Закира, Мораҡтан - Надя, Новохвалынскиҙан Клавдия исемле ҡыҙҙар ҙа, Мораҡтан Павел һәм Петя исемле малайҙар. Ул үҫмер малайҙарҙың нисә йәштә булыуын, аң кимәленең самаһын уйлап ҡараһам, әле лә күҙҙән йәш атылып сыға. "Айҙан ашыу ваҡыт килдек Мәскәү тирәһенә. Ҡот осҡос һуғыш үткән ерҙәр. Емерек өйҙәр, бомба шартлаған соҡорҙар, янып көл-күмергә әйләнгән ауылдар, аунап ятҡан танктар. Иламай саҡ киләбеҙ. Ә мал ҡыуышып килгән үҫмер малайҙарыбыҙ емерек танктарға, пушкаларға менеп, гильзалар йыйып, һуғыш уйнайҙар, һыйырҙар онотолдо. Уларға ни, ҡыҙыҡ. Иң уйнар саҡтары. Тыйып алып булмай. Ярай әле, Егор исемле ветфельдшер бар ине, уларҙы аҙ-маҙ тыңлата алды. Тик Егорҙы икенсе көтөүгә ала ла китәләр, бушамай. Белорет яғынан да беҙҙең кеүек мал ҡыуып килгәндәрҙең бер малайы гранатаны табып шартлатып, үҙе лә һәләк булғанын ишеткәс кенә бер аҙ баҫылдылар", - тип һөйләгән Хәзирәм бер журналисҡа. Айҙар буйы яланаяҡлап атлағандар. Күҙ етеп, ер һыуына башлағас ҡына аяҡтарына сабата кейеп алғандар. Тик оҙаҡҡа түҙәме һуң инде йүкә сабата! Сабаталары туҙғас, ни тапһалар, шуны аяҡтарына урап атлап маташҡандар. "Был аяҡтар эшкинерме икән?" - тип, ыуалап-ыуалап алабыҙ ҙа тағы китәбеҙ", - тип иҫенә төшөргөләй ине һыҙланған саҡтарында. Чкалов (хәҙерге Ырымбур) - Саратов - Сталинград (хәҙер Волгоград) - Воронеж - Харьков маршруты буйынса ҡыуғандар малды.

Сабырлыҡ ҡына түгел, ҡыйыулыҡ та, саялыҡ та булған Хәзирәлә. "Бер саҡ оло юл аша сығып, Харьков яғына бОролорға кәрәк булды. Әммә оло юлдан туҡтауһыҙ машиналар ағыла. Фронтовиктар ҡайтҡан мәл. Оло бер ташҡын кеүек. Осо-ҡырыйы юҡ. Юл ҡырлатып ҡыуабыҙ көтөүҙе. Берәй өҙөгө булыр, шул саҡ малды теге яҡҡа алып сығырбыҙ, тигән өмөт һүрелде. Мал ас. Беҙҙән алда үтеп киткән көтөү үләнде һыпырып-ҡырып ашап бөткән. Түҙмәнем. Оло юлға сыҡтым да, ишаралап, ҡул болғап, машиналарҙы туҡтата башланым. Туҡтанылар. Әммә хәрәкәт быуылды. Китте ҡысҡырыш. Мин әхирәттәремә ҡул болғайым. "Тиҙерәк булығыҙ, ҡыуа һалығыҙ малды!" тием. Ә үҙем машина юлынан китмәйем. Эргә-тирәләге кешеләр ҙә ярҙамға килде, малдарҙы ҡыуыша башланы. Башҡа көтөүселәр ҙә көтөүҙәрен ашыҡтырып сығара башланы.

Шулай беҙҙең һөйөү утта ла, һыуҙа ла сыныҡты. Беҙ өйләнешеп ярты йыл ғына йәшәгәс башланды шул һуғыш. Фронтҡа беренселәрҙән булып киттем. Төньяҡ Флоттың диңгеҙ пехотаһында десантсы булып хеҙмәт иттем. Егерме биштә ун ете йәшлек ҡыҙҙы кәләш итеп алып, ярты йыл да йәшәмәй, фронтҡа кит инде! Хәзирәмде шул тиклем һағына инем, ул саҡтағы үҙәк өҙәлөүен әле лә тоям. Шул саҡ аңланым: ауыртыуҙарға теш ҡыҫып булһа ла түҙеп була, йөрәк

һыҙлауҙарын бер нисек тә баҫып булмай... Ауылды күсерә башлағас та ошо һағыштың ҡабатланыуын тойҙом мин. Тыуған, йәшәгән ауыл да әҙәм тамыры менән тоташ бит... Кешенең һәр саҡ күңел һыйыныр төбәге булырға тейеш. Йылы хәтирәләр төбәге...

### Балаларым

Матур йәшәнек. Балаларыбыҙ һөйөү нуры солғанышында үҫте. Балалар өсөн һөйөү нуры - терекләккә, үҫентеләргә ҡояш нуры һымаҡ. Баланы тәрбиәләйем, тип, туҡтауһыҙ өгөт-нөсихәт биреп, теңкәһенә тейеү ярамай. Күңел йылылығы бир, ярат. Хәзирәм шулай итте. Балаларҙы әпәүләп ултырманы. Яратты ла, эшкә лә өйрәтте. Үҙебеҙ өлгө булып алдан йөрөнөк. Балаларҙа ҡыҙыҡһыныу уяттыҡ. Хеҙмәтте яза итмәнек. Ялыҡҡансы эшләтмәнек. Башлаған эштәрен матур итеп тамамлап ҡуйыуҙарын талап иттек. Хәҙер бына иҫкә төшөрәм дә Хәзирәнең аҡылына хайран ҡалам. Мин үҙем өйҙә һирәк булдым. Колхозда рәйес тә булдым, агроном булып та эшләнем. Һәр хәлдә, һары таңдан ҡара төнгә тиклем баҫыуҙа булынды. Балалар һәр ваҡыт әсәй менән. Дәрес әҙерләтеү, кейем рәтләү, ашауҙарын хәстәрләү. Күрше ауылға йөрөп уҡынылар. Ҡышҡы ҡыҫҡа көндәрҙә бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға тиклем йөрөрҙәр ине. Хәзирә кистән үк сыраҡ әҙерләп ҡуя. Оҙон таяҡ осона кәрәсинле сепрәк йәки ыҫмалалы сүбәк урай ҙа мәктәпкә китер саҡта тоҡандырып бирә. Иң алда барғаны юл яҡтырта. Илау ҙа, мыжыу ҙа, киреләнеү ҙә юҡ. Һәүетемсә тыныс ҡына сығып китәләр ине. Тыныс холҡло булды Хәзирә. Көләс йөҙлө. Асыулы сағын, һөмһөрө ҡойолоп, балаларға ҡысҡырып өндәшкәнен хәтерләмәйем. Кешелә бар нәмә лә нисек сама менән генә була икән? Ана шул сама менән йәшәү аҡылдыр ҙа инде. Хәзирә аҡыл менән йәшәне. Үҙебеҙҙең умарталыҡ булды. Бал уңыр булһа, эй ҡыуаныр ине. Йүкә балы - баҙарҙа иң үтемле тауар. Арбаға бал тейәп алабыҙ ҙа Троицк баҙарына китәбеҙ. Уңышлы ғына һатып бөтөп, ҡулға аҡсаһын алғас, Хәзирәм йылмая-йылмая йөрөй баҙар буйлап. Балаларға кейем ала. Һәр балаға таман ғына яратып кейерлекте ала торғайны. Ҡайҙан белеп алғандыр. Ә улар бит етәү ине беҙҙең! Үҙе юл буйы шулай тип һөйләнә: "Эй, Ильясым ҡыуаныр инде! Ул бит ҡыуанысын әллә ни һиҙҙереп бармай, йөҙөнөң балҡып китеүенән генә тойоп була. Булатым һирпелеп кенә ҡарап алыр ҙа кейемен тотоп төпкө бүлмәгә инеп китер. Тәлғәт кейемен ҡосаҡлап алыр ҙа яңы алып ҡайтҡан китаптарҙы аҡтара башлар. Наиләм, яңы кейем алғас, ҡыуанысынан һикереп төшһә лә, үҙегеҙгә алмағас, мин дә кеймәйем, тип киреләнеп алыр. Нәфисәм баҫалҡы ғына йылмайып ҡуйыр. Фәниәм бейеп китер хатта. Әнисәм рәхмәтен дә әйтә алмай, ҡояштай балҡып йылмайып тик торор..." Шулайтып, юл буйы ҡыуана-ҡыуана килә Хәзирәм. Ҡайтып ингәс, тап ул күҙ алдына килтергәнсә була.

### Бәхетле булырға бал ҡорттарынан өйрәндем

Бәхетте кеше үҙе ҡоя. Эшсәнлек - ул үҙе оло бәхет. Быны мин бал ҡорттарынан өйрәндем. Умартасылыҡ эшен бик тә яраттым. Атай-олатайҙарҙан ҡалған был һөнәрҙе ғүмеремдең һуңғы йылдарына тиклем ихлас башҡарҙым.

Бәләкәй генә, бик эшсән, бик аҡыллы бал ҡорттарына эшсәнлектә тиңләшерлек йән эйәһе юҡтыр. Эшсәнлеге яғынан ҡырмыҫҡалар, бәлки, уларҙан ҡалышмайҙыр. Ә бына татыулыҡтары ғәжәпкә ҡалдыра. Улар бер-береһен шул тиклем яҡшы аңлай, тоя. Тойоп аңлау һәләтенә мин уларҙан өйрәндем.

Бал ҡорттарын тәбиғи йәшәү шарттарынан айырмаҫҡа кәрәк, фәҡәт шул шарттарын камиллаштырырға һәм таҙа тоторға кәрәк. Ғөмүмән, тәбиғилеккә бер ни ҙә етмәй. Тәбиғилек тигән төшөнсә кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенә лә ҡағыла. Беҙҙең дә Хәзирәм менән мөнәсәбәтебеҙ бик тәбиғи булды - беҙ һүҙ менән аңлашыуға ҡарағанда, күберәк бер-беребеҙҙе тойоп аңлай инек: ҡараштан, ым-ишаранан, ярты һүҙҙән. Бер ваҡытта ла бер һүҙҙе ике тапҡыр ҡабатламаныҡ. Балалар быны тоя ине. Икебеҙгә ҡарата ла йылы мөнәсәбәттә булдылар. Үҙҙәре генә түгел, ейәндәребеҙ ҙә, бүләләребеҙ ҙә мөнәсәбәт йылылығын һаҡлай. Балаларҙы тәрбиәләү өсөн иң мөһим шарт ул - ғаиләлә күңел һыйыныр мөнәсәбәт урынлаштырыу. Хәзирә бик талапсан әсә булды. Шул уҡ ваҡытта ғәжәп нескә күңелле ине. Тәбиғәт яратты. Иҫтәре китеп ҡош тауыштары тыңлай торғайны. Умарталыҡҡа барған саҡта атлап барған еренән туҡтап-туҡтап тыңлап тора ине һандуғас һайрауҙарын. Хатта ҡайһы саҡта ҡайһы урында ҡайһы ҡош һайрауын да иҫенә төшөрә торғайны.

Мин уны бәхетле итеп йәшәтә алдым. Үҙе шулай тине. Ятраҡан кешендә бәхетле итә алыу - үҙеңдең дә бәхетең бит ул. Иртә китте фани донъянан. Үҙенсә китте. "Кеше көнлө булып, балаларҙы яфалап ятмаһам ярар ине, Хоҙайым", - ти торғайны. Теләге ҡабул булды. Һыйыр һауып ултырған ерҙә генә, башына ҡан һауып, беҙҙе ташлап китте лә барҙы...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хәзирә менән Рифҡәт Хәйретдиновтарҙың балалары бик үҙенсәлекле шәжәрә-альбом төҙөгән. Уны Күсмә Ҡыҙыл Альбом тип атағандар. Баш һүҙендә Альбомдың ете бүлектән торасағы һәм һәр Хәйретдиновҡа 50 йәше тулған көндө бүләк ителәсәге тураһында әйтелгән. Ғаилә альбомы Хәйретдиновтарҙың иң өлкәне - Ильястың 50 йәше тулыу уңайы менән башланған. Албомдың беренсе битендә тыуған йорт һүрәте. Артабан Әсәй менән Атайҙың бергә төшкән фото һәм ғаилә фотоһы. Альбом һәр баланың фотоһы менән дауам итә: Ильяс, Тәлғәт, Наилә, Нәфисә, Булат, Әнисә һәм Фәниә. Һәр фото аҫтына уларҙың төп холоҡ-фиғелдәрен сағылдырған бер нисә һүҙ яҙылған. Ул мәғлүмәттәрҙә бер нәмә иғтибарҙы йәлеп итә: балалар барыһы ла тәбиғәт ярата һәм эшһөйәрҙәр. Умартасы Рифҡәт Хәйретдинов эшһөйәрлеккә бал ҡорттарынан өйрәндем, тип бушҡа әйтмәгән. Быйдай эшһөйәрлеккә ул балаларын да өйрәткән, шуның өсөн улар һәр береһе үҙ урынында ҙур уңыштырға өлгәшкән. Ә үҙенсәлекле альбом төҙөү һәр береһендә: "Минең юбилейымда ниндәй һүҙҙәр яҙылыр, был альбом ҡайһылайыраҡ итеп тапшырылыр? Илле йәшемде ниндәй уңыштар, ниндәй ҡаҙаныштар менән ҡаршылармын?" - тигән яуаплылыҡты көсәйтә.**

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# САҘАҠАНЫ КИРЕ АЛМАЙЫҠ!

**Аллаға шөкөр, рамаҙан айындағы ифтар мәжлестәре, зөлхизә айындағы ҡорбан мәжлестәре быйылғы йылда айырыуса дәртле барҙы. Ураҙа тотоусы, ҡорбан салыусы мосолмандарҙың һаны күпкә артты.**

Беҙ Аллаһы Тәғәләнең Ҡөрьән аша еткергән айырым аяттарына иман килтереп, намаҙ уҡып, ураҙа тотоп, ҡорбан салып, икенсе аяттарына битараф булырға тейеш түгелбеҙ. Мәҫәлән, саҙаҡа биреү ғәмәлен алайыҡ. Ҡөрьән Кәримдең "Мәғүн" сүрәһенең 1-се аятында "Динде ялғанға һанаған кешене күрҙеңме һин?" тип, Аллаһы Тәғәлә ошондай кешеләрҙе миҫал итеп килтерә. Улар араһында саҙаҡа бирмәүселәр, үҙҙәренең байлыҡтарынан өлөш сығармаусылар хаҡында ла әйтелә. "Үҙе лә фәҡир һәм мохтаждарға тәғәм бирмәҫ һәм башҡаларҙы ла был эшкә ылыҡтырмаҫ", ти был турала Хаҡ Тәғәлә.

Беҙҙә иһә хәйер-саҙаҡа биреү ялғанға әйләнеп бөтөп бара. Ғәҙәттә, Ҡөрьән аяттарын тыңлау мәжлестәренә килгән бөтә кеше лә саҙаҡа тарата башлай. Кире ҡайтҡас, хәйергә тип тараткан аҡсаң шул уҡ кимәлдә булып сыға, хатта ҡайһы бер ваҡыт артып та китә. Беҙ биргән саҙаҡаларыбыҙҙы кире алған булып сығабыҙ түгелме? Мөхәммәт бәйғәмбәр бер хәҙисендә: "Хатта бер генә дирхем бирһәләр ҙә, үҙең биргән саҙаҡаны кире алма, сөнки саҙаҡаһын кире алған кеше ҡоҫҡанын кире ашаған кешегә тиң", - тип әйтеп ҡалдырған. Саҙаҡа таратыуҙы тыйһаң, кешеләр: "Нисек инде таратмайһың, ата-олатайҙарыбыҙ шулай иткән бит; мин бит ниәт итеп алып килдем; минән доғағыҙҙы ҡыҙғанаһығыҙмы әллә?" - тип һөйләнә башлайҙар.

"Тәүбә"сүрәһенең 60-сы аятында: **"Саҙаҡалар тик фәҡирҙәргә, теләнселәргә, уны йыйыусыларға, Алла юлында йөрөүселәргә, мосафирҙарға - Алланан йөкмәтелгән бурыс итеп (бирелә), Алла белә, Ул хикмәтле!"**- тип әйтелә. Тормоштары бар яҡтан да етеш кешеләрҙең саҙаҡаны алып ултырыуҙары Аллаһтың биргән ниғмәттәренә шөкөр итә белмәүҙе, барыһына ҡәнәғәт булмауҙы, мин фәҡирмен, тигәнде аңлата кеүек.

Ярлыға саҙаҡа биргәндә лә йәшереп биреү күрһәтеп биреүгә ҡарағанда хәйерлерәк һанала. "Уң ҡулың биргәнде һул ҡулың күрмәһен", тиелә бер хәҙистә. Биргән хәйеребеҙ тураһында бер кемгә лә һөйләргә тейеш түгелбеҙ, сөнки саҙаҡа Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн бирелә. Аллаһ бар нәмәне ишетә, белә, күрә! Ихлас күңелдән бирелгән саҙаҡа Аллаһ ҡаршыһында ҙур әжерҙер, киләһе бәлә-ҡазаларҙан пәрҙәлер.

**Зәлифә ШАКИРОВА.**
**Әбйәлил районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Уҡыуға һәләт: лидер булыу өсөн, уҡыусы булып ҡалығыҙ**

**4. Ғорурлығығыҙҙы еңегеҙ**

Белем алыуға әҙерлек, барыһын да белмәйем, тип таныу өсөн ҡыйыулыҡ талап итә. Әгәр даими рәүештә белем алыуҙы дауам итһәк, хаталарыбыҙ ҙа күберәк буласаҡ. Әммә яҙыусы һәм оҫта һөнәрсе Элберт Хаббарт әйтеүенсә, "тормошта яһау мөмкин булған иң ҙур хата - һәр саҡ уны яһауҙан ҡурҡыу". Бер үк ваҡытта ғорур ҙа, белем алырға әҙер ҙә булып булмай. Эмерсон үҙ заманында: "Нимәлер алыу өсөн, нимәлер юғалтырға кәрәк", - тигән. Үҫеш теләһәгеҙ, ғорурлығығыҙҙы ситкә ҡуйып тороғоҙ.

**5. Бер хата өсөн бер ваҡытта ла икеләтә хаҡ түләмәгеҙ**

Теодор Рузвельт: "Кем хаталанмай, ул алға бармай", - тигән. Был дөрөҫ тә. Әммә бер үк хатаны ҡабатлаған лидер алға бармаясаҡ. Әгәр лидер булараҡ белемгә ынтылһағыҙ, мотлаҡ хаталанасаҡһығыҙ. Уларҙы онотоғоҙ, әммә уларҙың нимәгә өйрәткәнен һәр саҡ иҫегеҙҙә тотоғоҙ. Әгәр үҙ хаталарығыҙҙан һабаҡ алмаһағыҙ, һәр ҡайһыһы өсөн ҡабат-ҡабат хаҡ түләргә тура киләсәк.

**Уйланырға мәжбүр итеүсе һорауҙар**

Бала саҡта орлоҡтар менән һатыу иткән магазин кәштәһенең башында шундай плакат уҡығайным: "Әгәр алған уңыш ҡәнәғәтләндермәһә, ултыртҡан орлоҡтарыңды тикшер". Ә һеҙ ниндәй уңыш алаһығыҙ? Тормошоғоҙ һәм лидерлыҡ сифаттарығыҙ көндән-көн, айҙан-ай, йылдан-йыл яҡшырамы? Әллә даими рәүештә яуланған кимәлдә ҡалыу өсөн бар көсөгөҙҙө һалаһығыҙмы? Әгәр әлеге ваҡытта үҙегеҙ күҙаллаған, өмөтләнгән урында түгелһегеҙ икән, тимәк, проблема белем алыуға әҙер булмауығыҙҙа. Ҡасан нимәнелер булһа беренсе тапҡыр эшләнегеҙ? Ҡасан үҙегеҙҙе уңайлы тоймаған урынға башкөлләй сумып, хәүеф аҫтына ҡуйҙығыҙ? Бер нисә көн йәки аҙна дауамында шәхси үҫеш һәм белем алыу буйынса психологик көйләнешегеҙҙе күҙәтегеҙ һәм үҙегеҙҙең ниндәй кимәлдә тороуығыҙҙы асыҡлағыҙ.

**Өйгә эш**

**Белем алыуға әҙерлегегеҙҙе күтәреү өсөн түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:**

- Хаталарығыҙға реакцияғыҙҙы күҙәтегеҙ. Уларҙы танийһығыҙмы? Урынлы булғанда, улар өсөн ғәфү үтенәһегеҙме? Йәки үҙегеҙҙе яҡлау һыҙығына баҫаһығыҙмы? Ышаныслы дуҫығыҙҙың фекерен белешегеҙ. Әгәр уларҙы ҡабул итә алмаһағыҙ йәки бөтөнләй хаталанмайым тип уйлаһағыҙ, үҙегеҙҙә белем алыу, атап әйткәндә хаталарҙан һабаҡ алыуҙы үҫтереү өҫтөндә эшләргә кәрәк.
- Ниндәйҙер яңы нәмә эшләргә тырышығыҙ. Бөгөн үк ниндәйҙер башҡа нәмә эшләү өсөн ғәҙәти ҡулсанан сығып, аҡылығыҙҙы эшкә егергә, хис-тойғоларығыҙҙы эшкә ҡушырға, физик торошоғоҙға көс һалырға тейеш буласаҡһығыҙ. Ауырлыҡтар һәм яңы саҡырыуҙар беҙҙе яҡшы яҡҡа үҙгәртә. Әгәр ысынлап та үҫергә теләһәгеҙ, бер-береһен алмаштырыусы саҡырыуҙарҙы көндәлек эшмәкәрлегегеҙ итеп алығыҙ.
- Ниндәй өлкәлә көслөһөгөҙ, шул өлкәлә белем алығыҙ. Йылына үҙегеҙ махсуслашҡан өлкә буйынса лидерлыҡҡа бағышланған 6-12 китап уҡығыҙ. Белгес булып торған өлкәлә белемегеҙҙе арттырыуҙы дауам итеп, бер ваҡытта ла белем алыуҙан, уҡыуҙан ялҡмаҫһығыҙ һәм ҡыҙыҡһыныуҙы юғалтмаҫһығыҙ.



## 10 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.30 "Мужское/Женское".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
